ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 август (урағай) 2024

№30 (1123)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тыуған йортто...**

ташлап ҡуймайыҡ



2-3

**Кәйеф...**

тупһанан башлана



6

**Игеҙәктәр**

Ата-әсә уларҙың икеһе ике шәхес икәнен онотмаһын



8-9

**Атай йылыһы**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Ҡартлыҡ бәхетле була алмай. "Бәхетле ҡартлыҡ" тигәнде әллә ниндәй йүнһеҙе уйлап сығарған. Ҡартлыҡ тыныс, йә ҡайғы менән тулы булырға мөмкин. Кеше хөрмәткә лайыҡ булһа, уның ҡартлығы тыныс үтер. Әгәр уны онотһалар, ташлаһалар, яңғыҙлыҡта тилмерер.*

*(В. Сухомлинский).*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Республикабыҙҙа алтынсы йыл ғәмәлдә булған "Башҡорт ихатаһы" һәм күп фатирлы йорт подъездарын ремонтлау программалары хаҡында ни әйтерһегеҙ?

***Зөлфиә КАМАЛЕТДИНОВА, Өфө ҡалаһының Сипайлово биҫтәһе:*** Ҡариҙел яры буйы урамында хәҙер инде 30 йылдан ашыу йәшәйем. Йортобоҙ панель плитәләрҙән ҡоршалған, улар ярылып, цементы онталып, ҡойолоп тора, ярыҡтарҙан ҡыш ел өрә, һыуыҡ. Нисәнсе тапҡыр инде альпинист егеттәр ямау һалып төштөләр. Ваҡытында тиҙләтеп төҙөп, күберәк халыҡты торлаҡлы итергә теләгәйнеләр ҙә, эҙемтәһен ғүмер буйы беҙгә баштан үткәрергә, өшөп-туңып, түбәнән аҡкан ямғыр һыуына тас ҡуйып, ыҙалап йәшәргә тура килде. Һатып китергә ынтылып та ҡараныҡ, алыусы юҡ, хаҡын төшөрһәк тә хатта...

Күрәһең, яҙмыштыр, тип, хәҙер бөтәһенә лә риза булып йәшәй бирә инек, былтыр йортобоҙға план буйынса капиталь ремонт эштәренә сират килеп еткән, имеш! Былтыр йәй башлағайнылар ремонтты, быйыл йәй башына тамамланылар: йорт эсендәге инженер системаһы селтәрен ремонтланылар, иң мөһиме - ҡыйыҡтың үҙен генә яңыртып ябыу ярты йылдан ашыуға һуҙылды, уның ҡарауы, беҙгә быйылғы ҡойма ямғырҙар һис тә ҡурҡыныс түгел: түшәмдән аҡмай хәҙер, стеналырыбыҙ кибеп ҡалды, уны матурлап буяп та ҡуйҙыҡ. Лифттарҙың заманса, уңайлыһын ҡуйҙылар -ҡыҫҡаһы, беҙ ҡәнәғәт ҡалдыҡ, бик тырышып, иртәнән кискә тиклем намыҫлы эшләне ремонтсылар.

Тик шуныһы: ремонттан һуң подъездарыбыҙ элеккесә йәмһеҙ, быҫраҡ, баҫҡыстары емерек килеш тороп ҡалды. Ни өсөн тигәндә, подъездарҙы ремонтлау капиталь ремонт исемлегенә инмәй, тинеләр. Ә бит подъездарҙың торошо ла бик мөһим йортта йәшәүселәр өсөн, сөнки, кем әйтмешләй, подъезд - йорттоң көҙгөһө, визит карточкаһы. Йорт милекселәренең дөйөм йыйылышын үткәреп, подъездарға ла ремонт үткәреү мәсьәләһен хәл итте МКД советы рәйесе үҙебеҙҙең идара итеү компанияһы менән берлектә. Был дөрөҫ ҡарар булды, сөнки капиталь ремонттан һуң үҙгәреп, матурланып киткән йортобоҙҙоң эс бошорғос подъездары бигерәк нык күҙгә ташлана ине шул. Һәм беҙгә ярҙамға кем килде, тиһегеҙ? Әлбиттә, хәҙер республикала биш йыл ғәмәлдә булған күп фатирлы йорттарҙың подъездарын ремонтлау программаһы! Хәҙер подъезыбыҙға килеп инһәң, танырлыҡ түгел: баҫҡыс майҙансыҡтарының элекке цемент иҙәненә керамик плитә түшәлде, стеналарҙы йөҙләү-буяу эштәре лә бик сифатлы башҡарылды. Элеккесә стеналар эс бошорғос күк йә йәшелгә түгел, ә офистарҙың стеналарын хәтерләтеп торосы көлһоу төҫкә үҙенән сыҡҡан биҙәктәр менән буялды. Тәҙрә быялалары ярылып бөткәйне, уларҙы ла евроөлгөләргә алыштырып сыҡтылар. Хәҙер инде йортобоҙҙо ташлап, бер ҡайҙа ла китке, күске килмәй: ни тиһәң дә, баштан-аяҡ төҙөкләндерелде, яңыртылды, күҙгә күренеп матурланды ул. Шундай кәрәкле һәм файҙалы проект - подъездар ремонтлау программаһын уйлап сығарып, эшкә ҡушҡан етәкселәргә бөтөн күршеләрем һәм үҙемдең исемдән ҙур рәхмәт белдерәм.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ШУЛАЙ БУЛА КҮРҺЕН!




**Башҡорт теле, ҡымыҙ, милли көрәш, башҡорт туй йолалары, башҡорт тирмәһен ҡороу технологияһы, башҡорт халыҡ музыка-поэтик ижады һәм башҡалар Башҡортостан Республикаһының Милли мираҫы дәүләт реестрына индерелә. Республика Башлығы Радий Хәбиров республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға тәҡдим иткән тейешле закон проекты көҙгө сессияла ҡарала.**

Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, башланғыс ата-бабалар хәтерен, быуындар күсәгилешлеген һәм теләктәшлеген һаҡлауға, шулай уҡ үҙенсәлекле рухи, мәҙәни, тарихи һәм тәбиғи мираҫ объекттарын популярлаштырыуға йүнәлтелгән. "Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына айырым яҡлау аҫтында булған объекттар индерелгән. Улар араһында - "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, "Асылыкүл", "Ҡандракүл", "Мораҙым тарлауығы", "Ирәмәл" тәбиғәт парктары, Ҡуштау, Торатау, Йөрәктау кеүек тәбиғәт ҡомартҡылары бар. Милли мираҫ дәүләт реестрына ингән башҡа объекттар ҙа ошондай һаҡлау статусына эйә була. Республиканың тәбиғәт ҡомартҡыларынан һәм архитектура йәһәтенән иҫтәлекле урындарынан тыш, был республиканың милли мәҙәниәтенең төрлөлөгөн билдәләгән үҙенсәлекле продукттар һәм алымдар", - тине спикер.

12+

✔ *Өфөлә музейҙарҙың күп булыуы оҡшай миңә. Төрлө өлкәне бөтә яҡлап та яҡтыртҡан музейҙар төбәктең һәм илдең тарихын һаҡлаусылар, быуындар араһында ныҡлы күпер булдырыусылар.*



БАШ ҠАЛАМ



# МӘҘӘНИ КИМӘЛЕБЕҘ...

**Дәүләттең, айырым алып ҡарағанда теге йәки был ҡаланың мәҙәни кимәлен, музей, театр һәм башҡа мәҙәниәт ойошмаларының әүҙем эшләп тороуы ла билдәләй. Юғары кимәлдәге мәҙәниәт булған ерҙә матурлыҡ була, дөйөм кешелек ҡиммәттәре юғары урын биләй. Был йәһәттән баш ҡалабыҙға, республикабыҙға һүҙ тейҙерерлек түгел. Бөгөнгө яҙмамда баш ҡаланың мәҙәни өлөшөнә ҡағылышлы үҙемдең күҙәтеүҙәрем менән бүлешкем килә.**

Өфөлә музейҙарҙың күп булыуы оҡшай миңә. Төрлө өлкәне бөтә яҡлап та яҡтыртҡан музейҙар төбәктең һәм илдең тарихын һаҡлаусылар, быуындар араһында ныҡлы күпер булдырыусылар. Ҡайһылыр төбәктәрҙә музейҙар ябылғанда, Өфөбөҙҙә уларҙың һаны арта барыуын күреү бик ҡыуанyслы хәл. В.Альбанов исемендәге Полярниктар музейы, Ф.И. Шаляпин исемендәге Музыка музейы баш ҡалабыҙҙың мәртәбәһен арттырҙы, мәҙәни кимәлде тағы ла юғарыраҡҡа күтәрҙе. Шулай уҡ күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә тағы ла бер музей асыласағы тураһында белдерҙе. Уның төп залы "Йәшмә бүлмәһе" исемен йөрөтәсәк һәм унда төбәк тарихы мозаика панноһы рәүешендә кәүҙәләндереләсәк, тип билдәләнә. Башҡортостаныбыҙ тарихын былдай үҙенсәлекле, креатив рәүештә күрһәтеү өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары өсөн бик тә ҡыҙыҡлы буласаҡ. Шулай уҡ яңы музейҙа "Ватанға хеҙмәт итеүҙә" ("На службе Отечеству") залы, алтын самородоктар залы, картиналар галереяһы һәм башҡа залдар буласаҡ. Башҡортостандың Милли музейы янында ғына урынлашасаҡ яңы мәҙәни учреждение барыһын да йәлеп итерлек урын буласаҡ.

Совет майҙаны күҙгә күренеп йәнләнә. Әле йәйге миҙгелдә бында матур концерттар үтә, филармония йырсылары, сәнғәт институты студенттары һәм башҡа сәнғәт эшмәкәрҙәре башҡарыуында матур йырҙар яңғырай, ҡурай моңо ағыла. Ял итеү өсөн тағы ла бер уңайлы, матур урын барлыҡҡа килде ҡалабыҙҙа.

Шулай уҡ баш ҡалабыҙҙа йыш ҡына ойошторолған башҡа төрлө мәҙәни саралар тураһында ла әйтеп үткем килә. Ҡалала әлеге ваҡытта асыҡ һауала йәштәр өсөн фестиваль, балаларға бихисап оҫталыҡ дәрестәре, костюмлы кисәләр, дискотекалар үткәрелә. Йәнең теләгәнен һайлап ал да - рәхәтләнеп күңел ас. Хатта Ағиҙел яры буйында асыҡ һауала кино ҡарарға ла мөмкин. Әйткәндәй, оҙаҡламай республиканың бер нисә районында заманса кинотеатрҙар эшләй башлаясаҡ. Урындағы халыҡ өсөн был мәҙәни объекттарҙың файҙаһы ҙур булыуына шик юҡ.

Өфө урамдарында йыш ҡына классик музыканы ла ишетергә мөмкин. Август аҙағында "Көҙ романтикаһы" фестивале уҙыуы тураһында белдерҙе республиканың Мәҙәниәт министрлығы. Башҡортостандың Дәүләт академия симфоник оркестры, Рәсәйҙең халыҡ артисы, пианист Денис Мацуев, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артистары, милләтебеҙҙең лайыҡлы улдары Илдар һәм Асҡар Абдразаҡовтар, Үзбәкстан һәм Мәскәү ҡунаҡтары башҡарыуында яңғыраясаҡ классик музыка фестивале тағы ла бер матур сара буласаҡ.

Баш ҡаланың мәҙәни тормошон сағылдырған был күҙәтеүемә, әлбиттә, бар әйтергә теләгәнем һыйып бөтмәне, сөнки улар бик күп. Алдағы яҙмаларымда уларҙы дауам итермен. Шулай уҡ баш ҡаланың башҡа өлкәһенә ҡағылған күҙәтеүҙәр ҙә эшләргә теләйем.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

**Апрель айындағы эҫелек, майҙың һыуығы, хәҙер килеп ҡойма ямғырҙар - быйылғы йыл республикабыҙ халҡын ныҡлы һынай ғына. Ағып киткән күперҙәр, юҡҡа сыҡҡан баҡсалар, ямғыр туҡтағанын көтөп бесән эшләй алмай ыҙаланыуҙар. Туризм менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙар ҙа күпселек туристарын юғалта. Быларҙың барыһы ла хафаға һала. Шулай ҙа республика етәкселегенең район һәм ҡалаларҙы бәләләре менән үҙҙәрен генә ҡалдырмайынса ярҙам ҡулы һуҙыуы бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуға өмөт уята.**

# ТЫУҒАН ЙОРТТО...

## ташлап ҡуймайыҡ



Ана бит, Әбйәлил, Йылайыр райондары хакимиәт башлыҡтарының ташҡын һөҙөмтәләрен бөтөрөүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙәре республика Башлығы тарафынан шунда уҡ иғтибарға алынды. Бөрйән районында ла күперһеҙ тороп ҡалған ауылдар бар, улар ҙа ярҙамһыҙ ҡалмаҫ, моғайын.

Тәбиғәт шарттары яйланыр, тормош ҡәҙимге рәүешенә ҡайтыр. Республикала был мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бер рәттән, башҡа өлкәлә лә эштәр башҡарыла. Мәҫәлән, республикала йыл аҙағына тиклем санкцияланмаған сүплектәр юҡҡа сығарыласаҡ, тип күҙаллана. 2019 йылдан алып барылған был эшмәкәрлек барышында Башҡортостанда 2,9 мең сүп-сар полигоны таҙартылған. Ҡалған 208 сүплектең 90-ны "Экология" милли проектының "Генераль таҙартыу" программаһы сиктәрендә юҡ ителәсәк.

Шулай ҙа, халыҡ әйтмешләй, "Таҙартҡан ер түгел, ә бысратмаған ер таҙа". Иң тәүҙә һәр беребеҙ ошоно аңларға, балаларға өйрәтергә бурыслыбыҙ. Ян-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Республикабыҙҙа алтынсы йыл ғәмәлдә булған "Башҡорт ихатаһы" һәм күп фатирлы йорт подъездарын ремонтлау программалары хаҡында ни әйтерһегеҙ?***

***Сәйфулла ТАҺИРОВ, хеҙмәт ветераны, Мәсетле районы:*** "Башҡорт ихатаһы" тигән программа барлығын гәзиттәрҙән уҡып, телевизор яңылыҡтарынан ғына белә инек һәм өфөләр өсөн шатланып та, көнләшеп тә ҡарай инек, хәҙер иһә, шөкөр, был программа ауыл районларына ла килеп етте. Мин Оло Ыҡтамаҡта, Трактовая урамында йәшәйем. Беҙҙең был урамдағы тиҫтәләгән йорт алды биләмәләре төҙөкләндерелде: тотош майҙанға йомшаҡ резина ябма түшәлде - был бала йығылып имгәнә-нитә ҡалмаһын өсөн бик яҡшы; кескәйҙәр өсөн карусель, ҡомлоҡ ҡумтаһы, яһалма тауҙан шыуыу ҡоролмалары, ә үҫмерҙәргә спорт майҙансыҡтары бар. Хатта өлкәндәр хаҡында ла онотмағандар, рәхмәт яуғырҙары: ултырып ял итергә, башҡа тиңдәштәр менән һөйләшеп-сөкөрҙәшеп алырға, саф һауала гәзит уҡырға мөмкин: эскәмйәләр теҙелеп киткән. Хәҙер инде йорт алдыбыҙ биләмәләренең төҙөкләнгән, уңайлығын күргәс, элек нисек йәшәнек, ҡайҙа ултырып ял иттек икән әләгеп ҡоламалы хәлдә булған ихаталарҙа, тип күңел ытырғанып ҡуя.

Төҙөклөк - төҙөклөк инде ни генә тиһәң дә. Бер тигәс тә, пенсионерҙар ейән-ейәнсәрҙәре менән ошонда уйнарға сыға, улары майҙанды бер итеп йүгерешә, уйын ҡоролмаларында шөғөлләнә, бейеклектән ҡурҡмаҫҡа өйрәнә, сыныға ала. Икенсенән, былдай заманса ихаталар балаларҙа һәм йәштәрҙә эстетик зауыҡ, мәҙәнилек сифаттары тәрбиәләй, тип уйлайым, сөнки улар бындағы матурлыҡҡа, төҙөклөккә бик һаҡсыл ҡарай, файҙалы ял итә, матурлыҡты, уны булдырған төҙөүселәрҙең хеҙмәтен баһаларға өйрәнә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Красный Луч хакимиәте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа "Максим" пулеметы өсөн пулемет таҫмаһы йәшниген тапшырҙы. Радий Фәрит улы әйтеүенсә, пулемет таҫмаһы өсөн йәшник Башҡорт атлы дивизияһы алыштары урынында табылған. "Был, ысынлап та, Башҡортостан дивизияһы тарихы менән бәйле, - тине Башҡортостан Башлығы. - Был экспонатты мәңгелеккә һаҡлау өсөн музейға тапшырмаҡсымын". Билдәләнеүенсә, экспонат Хәрби Дан музейы филиалында, Өфөнөң Дим районында урынлашҡан 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында лайыҡлы урын аласаҡ.

✔ Рәсәй Хөкүмәте федераль әһәмиәттәге дауалау-һауыҡтырыу урындары, федераль әһәмиәттәге курорттар, курорт төбәктәре исемлеген раҫланы. Ил Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған был бойороҡ 2024 йылдың 1 сентябрендә көсөнә инә. Федераль әһәмиәттәге курорттар исемлегендә Башҡортостандың Шафран ҡымыҙ менән дауалау шифаханаһы ла бар.

✔ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйыл 30-сы тапҡыр билдәләнгән Рәсәй почтаһы көнө уңайынан тантаналы сарала ҡатнашты. Байрам Рәсәй Президентының 1994 йылдың 16 майындағы "Рәсәй почтаһы көнө тураһында" указы менән булдырылған һәм илдең даими эске почта элемтәһе ойошторолоуҙың 300 йыллығына арналған.Почта бүлексәләре һаны буйынса (ә улар беҙҙә 1280) Башҡортостан илдә иң ҙур төбәк булып тора. Республикала шулай уҡ ете курьер участкаһы, магистраль сорттарға айырыу үҙәге, автотранспорт предприятиеһы иҫәпләнә. Ә почта тармағында бөтәһе 7 меңдән ашыу хеҙмәткәр эшләй.

✔ Башҡортостан буйынса Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре Учалы районының Мулдаш ауылы халҡына ярҙам күрһәтә. Ҡотҡарыусылар көслө ямғырҙар арҡаһында оло ер менән бәйләнешһеҙ ҡалған халыҡҡа аҙыҡ-түлек, кәрәкле дарыуҙар һәм эсәр һыу ташый. "Һыу баҫыу ҡурҡынысы юҡ. Хәл даими контролдә тотола", - тип хәбәр иттеләр ведомствонан.

✔ Башҡортостанда хәлдең бер аҙ яҡшырыуы сәбәпле Белорет, Дыуан, Мәләүез, Ҡариҙел, Бөрйән, Учалы райондарында 12 һыу баҫыу ҡурҡынысын контролдән алдылар. Шул уҡ ваҡытта Стәрлетамаҡта һәм Стәрлетамаҡ районында 3 автоюлда һыу баҫыу ҡурҡынысы һаҡлана. Синоптиктар мәғлүмәте буйынса, киләһе өс тәүлектә ямғырҙар кәмергә тейеш.

✓ *Хужалары булып та, ташландыҡ хәлдәге йорттарҙы, ихаталарҙы күреү күңелде әрнетә. Кемдер шунда йәшәп тә илтифат итмәй, ҡайһы берәүҙәр йылына бер килеп әйләнә, өсөнсөләр йылдар буйы күренмәй.*



ыраҡ ҡына Әбйәлил районында ялда булырға тура килде. Унда ҙур, матур, төҙөк ауылдар, халыҡ дәртләнеп йәшәй. Ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең әле булһа ауыл осона машина һәм тракторҙар менән алып барып сүп-сар түгеүе яҡшы күренеш түгел. Әлбиттә, уларҙы ла аңларға була, сөнки "Эко-сити" урынлаштырған сүп-сар һауыттарына серегән бағаналарҙы, емерелгән диван һәм башҡа ҙур көнкүреш әйберҙәрен һыйҙырып булмай. Хатта ҙур контейнер ҙа был эште еңеләйтмәй. Ауылдан ике кеше йорт-ҡураһын таҙалап, эре-торо сүп-сарын ҙур контейнерға алып барып ташлаһа, ул тулып та ҡуя, ә уның күршеһе сүбен ҡайҙа ҡуйырға тейеш? Ә "Эко-сити" контейнер ситендә ятҡан сүп-сарҙы алмай күп осраҡта. Дилеммамы?

Урындағы хакимиәт башлыҡтары, атап әйткәндә, Әбйәлил районында, ауылдарҙы таҙалыҡта тоторға тырыша. Кәрәк икән, үҙҙәре лә сығып эшләй, халыҡты ла йорт-ҡура тирәләрен тәртиптә тоторға саҡырып өндәп тора. Халыҡ үҙе лә әүҙем һәм күпселек осраҡта эргә-тирәһендә сүп-сар ятыуға, бейек булып үлән үҫеп ултырыуға юл ҡуймай. Уларға афарин тиергә генә ҡала. Шулай ҙа хужалары булып та, ташландыҡ хәлдәге йорттарҙы, ихаталарҙы күреү күңелде әрнетә. Кемдер шунда йәшәп тә илтифат итмәй, ҡайһы берәүҙәр йылына бер килеп әйләнә, өсөнсөләр йылдар буйы күренмәй. Емерелеп барған өйҙәргә тейергә хакимиәттең хоҡуғы юҡ, сөнки уларҙың хужалары бар иҫәпләнә. Йылдар дауамында үҙенең дә, күршеһенең дә үлән-бесәнен сабып арығандар тора-бара ҡул һелтәй. Ошо күренеште юҡ итеү өсөн ниндәйҙер әмәл уйларға кәрәктер бит инде.

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровтың бер башланғысы тураһында яҙып сыҡҡайны: "Әйҙәгеҙ, ауылдарыбыҙҙағы хужаһыҙ ҡалған, әммә унда тыуып-үҫеп, ситкә сығып киткән кешеләрҙең ҡарамағында булған тыуған йорттарыбыҙҙы йә төҙөкләндерәйек, йә урындағы хакимиәт ҡарамағына тапшырайыҡ. Ауыл йәмен боҙоп ултырмаһын улар", - тип мөрәжәғәт иткәйне депутат. Үҙенең дә тыуған йортон төҙөкләндереп, һирәкләп булһа ла ҡайтып йөрөүе тураһында ла телгә алғайны. Һәйбәт саҡырыу булды был. Әйҙәгеҙ, шулай итәйек!

**Рәмзил ИШТУҒАНОВ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### *Республикабыҙҙа алтынсы йыл гәмәлдә булған "Башҡорт ихатаһы" һәм күп фатирлы йорт подъездарын ремонтлау программалары хаҡында ни әйтерһегеҙ?*

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Республика кимәлендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән 2019 йылда башланып киткән "Башҡорт ихатаһы" һәм күп фатирлы йорттар подъездарын ремонтлау программалары ҡала һәм ауыл халҡында киң хуплау тапты һәм һәр кем күңеленә хуш килде. Йылдар буйы йәшәгән еребеҙҙең төҙөкләнеүе һәм яңырыуы, төрлө төҫтәр менән балҡып китеүе тормошобоҙҙо йәмләп, йоҡомһорап йөрөгәндәрҙе уятып ебәргәндәй булды. Юғиһә, ошоға тиклем ҡайҙа барып ваҡыт үткәрергә белмәй, ишек алдында ла йәм тапмай, кухня-диван-телевизор өсмөйөшөнән башҡаны белмәгән өлкәндәр ҙә балалар шикелле ҡыуанды был яңылыҡҡа, сөнки хәҙер яңыртылған ихаталағы спорт майҙансығына сығып, спорт ҡоролмаларында бушлай, теләһәң, көн оҙоно шөғөлләнергә була; теләйһең икән, матур эскәмйәләрҙә саф һауала китап-гәзит уҡып ултыр йә күршең менән хәл-әхүәл белешеп, сөкөрләшеп ал; теләйһең икән, ейән-ейәнсәрҙәрең менән сығып уйна. Балалар бында яһалма тауҙан шыуып кинәнә, бәүелсәктә бәүелә, каруселдә зыр әйләнә, ҡомлоҡта уйнай. Яңылыштан йығыла-нитә ҡалһа ла, балалар майҙансығы йомшаҡ резина япма менән ҡапланған, ҡурҡынысы юҡ. Ҡыҫҡаһы, ихатабыҙ хәҙер шат тауыштарҙан гөр килә - уҡыусы балалар каникулдарында ҡайҙа етте, шунда ел ҡыуып йөрөмәй, ихаталағы майҙанда ваҡыттарын файҙалы итеп үткәрә: спорт менән шөғөлләнә, волейбол, баскетбол уйнай. Эргәләге мәктәптең шулай уҡ ҡайтанан төҙөкләндерелгән спорт майҙанында футбол ярыштары үткәрә. Аулаҡ мәлен тап килтереп, күбеһенсә иртәнге сәғәттәрҙә мин үҙем дә ошо спорт майҙанындағы "Һауа саңғылары" ҡоролмаһында шөғөлләнергә ғәҙәтләндем әле. Был күнекмә аяҡ мускулдарын нығыта, координацияны тигеҙләй. Күрше йортта йәшәгән ҡатын менән икәүләп, өҫтәл теннисы ла уйнап алабыҙ.

Үкенескә күрә, "Башҡорт ихаталары"нда бөтәһе лә ал да гөл тип әйтеп булмай, ләкин был уның программаға ҡағылышы юҡ, ә ҡайһы бер үҫмер һәм йәштәребеҙҙең тәрбиәһеҙлегенә ҡарата әйтелә. Ошо матур эште юҡҡа сығарырға әҙер торған йәштәрҙең булыуы үкенесле. Улар кис һәм төндә лә хатта өйкөмләшеп ошонда йыйылыша, шау-шыу ҡуптара, һыҙғыра, музыка уйната, ә үҙҙәре беҙ ултыра торған эскәмйәгә бысраҡ аяҡ кейемдәре менән баҫып, эскәмйәнең арҡаһына менеп ҡунаҡлай, тирә-яҡҡа төкөрөнә, сүп-сар, буш шешәләр ырғыта, йәмһеҙ яҙыуҙар ҡалдыра... Улар менән һөйләшеүҙең файҙаһы юҡ, бары тик тупаҫлыҡҡа осрайһың да ҡул һелтәйһең. Ә кем был йәштәрҙе тәртипкә өйрәтергә тейеш икән? Был һорау асыҡ килеш ҡала.

Тағы бер мәсьәлә буйынса теләк шундай: "Башҡорт ихатаһы" программаһы үҙенең кәрәкле һәм ваҡытлы булыуын раҫланы инде, тик ошо яңы ихата майҙансыҡтары тирәләй ағастар ултыртып сығыу ҙа ҡаралһа икән программала. Йәшелләндереү - төҙөкләндереүҙең бер сараһы бит, юғиһә. Ул ағастар гөрләп үҫеп китер һәм ял итеүселәрҙе күләгәләре менән ҡояш ҡайнарлығынан һаҡлап, еләҫлек биреп ултырырҙар ине.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# ҠАР БАШЫНА - ҠАР...

## хан башына хан етер




**Үткән аҙнаның һуңғы көнөнә ҡарата РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, Рәсәй яугирҙары Донецкиҙың Прогресс һәм Евгеновка тораҡ пункттарын азат итте. Украина ғәскәрененең тәүлек эсендәге юғалтыуҙары 1930 кешегә барып етте, тип хәбәр итә РИА Новости агентлығы оборона ведомствоһы мәғлүмәттәренә һылтанып.**

Украина хәрби көстәре проблемалар алдында тороп ҡалды. Сит ил ялланыусылары түҙеп торғоһоҙ шарттарҙан биҙеп, күпләп Украина армияһы сафтарын ташлап китә башланы. Үҙәк разведка идаралығы (ЦРУ) аналитигы Ларри Джонсон фаразлауынса, был конфликтты яйға һалыу Украинаның капитуляцияһы менән тамамланасаҡ. Мәғлүм булыуынса, Мәскәү бер нисә тапҡыр һөйләшеүҙәргә әҙер булыуын белдерҙе, ләкин Киев режимы закон кимәлендә килешеүҙәргә тыйыу һалды. Украинаның экс-президенты Леонид Кучманың элекке советнигы Олег Соскин Зеленскийҙан был тыйыу указын юҡҡа сығарыуҙы талап итте.

Ә бына АҠШ властарында был арала Украина ҡайғыһы юҡ. Штаттағы "шым-шым" хәбәрҙәргә ҡарағанда, илдәге билдәле бер даирәләр, атап әйткәндә, эре бизнесмендар баҫымы аҫтында Байден киләһе срокка һайланыуҙан баш тартырға мәжбүр булды. Трамп һәм уның көрәштәштәре был хәлде "йәшертен дәүләт перевороты" тип атаны. Шулай итеп, вице-президент Камала Харрис праймеризһыҙ ғына Байден урынына президентлыҡҡа кандидатура итеп күрһәтелде. Шуны ғына көтөп торған Камала дәртләнеп эшкә тотондо һәм һайлау алды кампанияһын үткәреү өсөн күҙ асып йомғансы 200 млн доллар аҡса йыя ла һалды. АҠШ-та сираттағы алтмышынсы президент һайлауҙары ошо йылдың 5 ноябренә билдәләнгән.

Республикандар партияһынан, мәғлүм булыуынса, Дональд Трамп президентлыҡҡа дәғүә итә. Әйтеүҙәренсә, Харрис Трамп өсөн Байденға ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ "көнәркәшсе". Хәйер, был ханымды беҙ ике дәғүәсе араһында сентябрҙә буласаҡ дебаттарҙа яҡынданыраҡ беләсәкбеҙ. Һәр хәлдә, Трамп алдында Камала үҙенең сәйәсмән булараҡ профессиональ сифаттары менән маҡтана алмай, ул прокурор булып эшләгән һәм шуға ла телмәрендә, күрәһең, күберәк ғәйепләү интонацияһы яңғырай. Икенсенән, уның һайлау платформаһы ла, командаһы ла юҡ. Ул Байденды уҡытыусыһы тип иҫәпләй һәм уның бөтөн етешһеҙлектәрен, хаталарын уртаҡлашырға мәжбүр. Үҙенең ҡайһы бер белдереүҙәрендә ул Рәсәй хаҡында дустарса булмаған мөнәсәбәте менән асылды. Сығышы яғынан Көньяҡ Азиянан булған ҡара тәнле был ҡатын Трампты еңгән хәлдә Американың тәүге ҡатын-ҡыҙ президенты булараҡ тарихҡа инеп ҡаласаҡ.

Ә бына Кремль Харрис хаҡында ниндәйҙер баһалама биреүҙән алыҫ тора, сөнки АҠШ-тың вице-президенты булараҡ, уның тарафынан ике ил мөнәсәбәттәренә индергән бер ниндәй ҙә өлөшө һиҙелмәне. Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Николай Патрушев әйтмешләй, Трамп еңәсәкме, әллә Камаламы - Рәсәй өсөн барыбер, сөнки был йүнәлештә беҙҙең мәнфәғәттә әлегә яҡшыға үҙгәреш күренмәй. Ә шулай ҙа, кем белә, президентлыҡҡа дәғүәселәр исемлеге был ике кандидат менән генә сикләнмәй бит, һайлау алды көрәшендә "шахмат фигуралары"ның хәле ҡырҡа үҙгәреп китеүе лә ихтимал. Кем белә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына Ейәнсура районы үҙәгендәге ихатаны "Башҡорт ихаталары" программаһына индерергә ҡушты. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, һуңғы биш йылда республикала "Башҡортостан ихаталары" программаһы буйынса 1,3 меңдән ашыу ихата төҙөкләндерелде. 2024 йылда 143 биләмәне яңыртыу күҙаллана. Республикала "Башҡортостан ихаталары" программаһы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән 2019 йылда эшләй башланы.

✓Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығына Бөрйән районының Иҫке Собханғол һәм Мәндәғол ауылдары араһында 35 кешенән торған туристик төркөмдөң Ағиҙел йылғаһы буйлап катамарандарҙа йөҙөүе хаҡында хәбәр килгән. "Ҙур амфитеатр ҡаяһы" районында Яр Саллы ҡалаһында йәшәүсе 50 йәшлек ир катамарандан ҡолап төшә. Турист ҡотҡарыу жилеты кеймәгән, һөҙөмтәлә ул шунда уҡ һыу аҫтына киткән. "Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Өфө эҙләү-ҡотҡарыу отрядынан бер төркөм ҡотҡарыусылар ирҙе эҙләй. Әлеге мәлдә эҙләү бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәй.

✓26 июлдә Директорҙар советы ултырышында Үҙәк банк төп ставканы бер юлы 2 процент пунктына күтәрҙе. Хәҙер ул йылына 18 процент тәшкил итә. 2023 йылдың декабренән, хатта уҙған айҙа ла төп ставка 16 процент кимәлендә һаҡланды. Төп ставка буйынса киләһе ултырыш 13 сентябргә тәғәйенләнгән. Монетар властар, баҙар реакцияһына ҡарап, ставканы артабан да күтәрергә әҙер булыуын белдерҙе.

✓Башҡортостанда 2024 йылда пилотһыҙ осоу аппараттары (БПЛА) менән эшләргә өйрәтеү өсөн махсус кластар һәм түңәрәктәр асыла. Хөкүмәттең тейешле ҡарары Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Документтан күренеүенсә, БПЛА менән эшләү буйынса кластар һәм түңәрәктәр 21 белем биреү ойошмаһында асыла. Бөтәһе 525 уҡыусыны йәлеп итеү ҡарала. Бынан тыш, проект сиктәрендә педагогик хеҙмәткәрҙәр ҙә уҡытыла, белем биреү программалары әҙерләнеп, бойомға ашырыла.

✓ *Йәнә төбәктә бөтә муниципаль райондар, ете ҡала округы һәм 52 ҡала һәм ауыл биләмәһе Советтарының яңы составына депутаттар һайланасаҡ, урындағы советтарға өҫтәмә һайлауҙар үткәреләсәк.*



ҠЫҪҠАСА

# ҺАЙЛАУҘАРҒА!

**6, 7 һәм 8 сентябрҙә Башҡортостан Башлығын һайлау үтә. Ошо көндәрҙә республиканың 2 978 221 һайлаусыһы өсөн 3300-ҙән ашыу һайлау участкаһы үҙ ишектәрен аса.** Шулай уҡ Өфө районында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өҫтәмә һайлауҙар ойоштороla. Йәнә төбәктә бөтә муниципаль райондар, ете ҡала округы һәм 52 ҡала һәм ауыл биләмәһе Советтарының яңы составына депутаттар һайланасаҡ, урындағы советтарға өҫтәмә һайлауҙар үткәреләсәк. 10 партия, шул иҫәптән парламент партиялары, һайлауҙарҙың бөтә кимәлдәрендә лә үҙ кандидаттарын тәҡдим итте. Һайлау комиссиялары партияларҙан һәм үҙ-үҙен тәҡдим иткән кандидаттарҙы теркәүҙе тамамланы. 6, 7 һәм 8 сентябрҙә һәр участкала Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы әҙерләгән 13113 күҙәтеүсе һайлау барышын күҙәтәсәк. 6, 7, 8 сентябрҙә Башҡортостандың һәр районында һәм ҡалаһында яҡшы бүләктәр менән дәртләндереү акцияһы ойошторола, шулай уҡ һайлау участкаһына килгән һәр кемгә ташламалар биргән белешмәләр тапшырыласаҡ.

✓ **Сибай - Аҡъяр юлы төҙөкләндерелә башланы. "Башкиравтодор" компанияһының Өфө юл ремонтлау-төҙөлөш йәмғиәте эшселәре Хәйбулла районының Сиҙәм ауылы янындағы 7,6 километр оҙонлоғондағы юлға асфальт-бетон япмаһын түшәүҙе тамамлай.** Әлеге ваҡытта юлсылар Баймаҡ районында эшләй, Урғаҙа ауылынан Хәйбулла районы менән сиктәш ерҙә асфальт-бетон япмаһын түшәү өсөн таҙартыу эштәре менән булыша. "Хәйбулла районында, 2024 йылға планлаштырылғанса, беҙ 7,6 километр оҙонлоғондағы юл япмаһын һалыуҙы тамамлайбыҙ, былтыр аҫҡы ҡатламын һалдыҡ, бөгөн юғары ҡатламын түшәйбеҙ, - ти Зимфир Кәримов. - Әле Баймаҡ районында эш дауам ителә, бөтәһе 20 берәмек техника, ике бригадала 40 кеше йәлеп ителгән". Әйткәндәй, Сибай - Аҡъяр юлындағы 64 километр саҡрымды норматив хәлгә килтереү талап ителә. Быйыл юлсылар 27 километрҙан ашыу юлға асфальт түшәһә, шулай уҡ Баймаҡ һәм Хәйбулла райондарында 15,9 километр оҙонлоҡтағы яңы участкалар ремонтланасаҡ. 2025 йылда әлеге юлдың 19,6 саҡрымын ремонтлау планлаштырыла.

✓ **Башҡортостан сиркәүҙәрендә һәм мәсеттәрендә махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы һалдаттарҙы ҡеүәтләп ғибәҙәт ҡылыуҙар ойошторолаcаҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә быныӊ өсөн көндәрҙе билдәләргә тәҡдим итте.** Радий Фәрит улының һүҙҙәренсә, был - Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың туғандарының һәм яҡындарының үтенесе. "Миненсә, был мөһим. Хәҙер беҙҙең рухи тормошобоҙҙоң мөһим өлөшө - йугирҙарыбыҙҙың сәләмәтлеге өсөн, һәләк булған егеттәрҙең иҫтәлегенә доғалар бағышлау", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров һәм төбәктең рухани лидерҙары менән кәңәшләшергә ҡушты. Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Сафа Тажетдин, митрополит Никон, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе Айнур Бирғәлин Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың башланғысын һәм йугирҙарға һәм уларҙың яҡындарына рухи ярҙамдың мөһимлеген тулыһынса хупланы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БҮЛӘКЛӘҮ ДӘРТЛӘНДЕРӘ

**Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә бер нисә һалдатты хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән ҡыйыулығы һәм ҡаһарманлығы өсөн бүләкләне.**

Радий Хәбиров Оскар Ситдыҡовҡа Шайморатов генерал орденын тапшырҙы. "Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡулынан ошондай юғары награданы алыу - минең өсөн ҙур мәртәбә, - тине Оскар Ситдыҡов. - Радий Фәрит улына, ниһайәт, тыуған яғыма ҡайтырға ярҙам иткәне өсөн рәхмәт һүҙҙәрен әйткем килә. 2007 йылдан алып Рәсәй буйлап йөрөйөм һәм яҡындарыма, ғаиләмә ҡайтҡым килде, ә Радий Фәрит улы минә хыялымды тормошҡа ашырыу өсөн үҙенсәлекле мөмкинлек бирҙе".

"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы командирының тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары, подполковник Рөстәм Шәһәбетдинов Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Бүләк алыусы бер йыл элек, 29 июндә, Радий Хәбировтың полкҡа яу байрағы бүләк итеүен иҫкә алды - был дата полкҡа нигеҙ һалыу көнө тип иҫәпләнә. "Был наград беҙҙең полктың хәрби хеҙмәтенә баһа булып тора. Былтыр 20 августа алғы һыҙыҡҡа юлланып, Луганск халыҡ республикаһында, Төньяҡ хәрби округ зонаһында хәрби заданиеларҙы башҡара башлағандан алып полк үҙенә йөкмәтелгән бурыстарҙы уңышлы башҡара, командование ла беҙҙең эште юғары баһаланы", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Рөстәм Шәһәбетдинов. Подполковник һүҙҙәренсә, 870 кеше дәүләт наградаларына лайыҡ булған. Улар араһында һәләк булғандан һуң Батырлыҡ ордены менән бүләкләнгәндәр ҙә бар. 900-ҙән ашыу һалдат ведомство наградаларына лайыҡ булған. Төньяҡ хәрби округы зонаһында хеҙмәт итеүселәргә республика миҙалдары һәм ордендары тапшырылған. "Етәкселек тарафынан бирелгән ошо юғары баһа беҙҙең бурыстарҙы теүәл үтәүебеҙҙе күрһәтә. Ныҡлы тыл булмаһа, беҙ уларҙы үтәй алмаҫ инек. Полк командованиеһы исеменән республикабыҙҙың барлыҡ районҡалаларына оло рәхмәтемде, шулай уҡ һеҙгә, Радий Фәрит улы, беҙҙең полкты формалаштырыуҙа шәхсән ҡатнашҡанығыҙ өсөн ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм".

# ҺЫУҘАН ДА ҠАЛМАЙ

**Башҡортостанда һуңғы көндәр көслө ямғырҙар арҡаһында ярайһы уҡ көсөргәнешле булды. Республика Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә райондарҙа һыу баҫыу эҙемтәләрен бөтөрөүгә бәйле бер нисә күрһәтмә бирҙе. "Ташҡындан һуң барыһын да тиҙ һәм һөҙөмтәле тергеҙегеҙ. Бында шәхси зыян, юлдар, күперҙәр хаҡында һүҙ бара. Был мәсьәләне һүҙмағыҙ. Бында Хөкүмәт үҙенең һөҙөмтәле эшен күрһәтергә тейеш", - тине Радий Хәбиров.**



Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов әйтеүенсә, 15 июлдән 28 июлгә тиклем төбәктә хәүефле һәм насар һауа шарттарына бәйле, "112" системаһына Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Бөрйән, Йәрмәкәй, Көйөргәҙе, Мәләүез, Салауат, Туймазы һәм Учалы райондарынан, шулай уҡ Октябрьский һәм Сибай ҡалаларынан 158 хәбәр килгән. "Дөйөм алғанда, 19 шәхси йортто, 240 йорт яны участкаһын, бер баҡса участкаһын, ун юл участкаһын, аҙ һыуыл һигеҙ күперҙе һыу баҫҡан, шулай уҡ ике быуа ярҙарынан сыҡҡан. Иң ҡатмарлы хәл Әбйәлил, Белорет һәм Учалы райондарында күҙәтелде. Республика Башлығы ҡушыуы буйынса Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Сәғитов етәкселегендә район хакимиәттәре менән онлайн рәүештә даими аралашыу ойошторолдо, - тип хәбәр итте ведомство етәксеһе. - Ҡотҡарыу хеҙмәттәре муниципаль хакимиәттәр менән берлектә 96 кешене, шул иҫәптән 29 баланы эвакуациялаған, барыһы ла туғандары янына урынлаштырылған. Һәләк булыусылар юҡ. Халыҡҡа ярҙам күрһәтеүгә республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан һәм Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан 73 кеше, 32 берәмек техника, һигеҙ һыу судноһы йәлеп ителгән. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы базаһында оператив штаб булдырылған, унда тәүлек әйләнәһенә эш ойошторолған".

# ЭШЛӘҮСЕ ПЕНСИОНЕРҘЫҢ...

**Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан бүлексәһе Страховкалы пенсиялар тураһындағы киләһе йылдан көсөнә инәсәк федераль законға төҙәтеүҙәр менән бәйле, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға индексацияны ҡайтанан ғәмәлгә ашыра башлаясаҡ. Шуға ярашлы, республикалағы эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы эшләмәгәндәрҙеке кеүек үк кимәлдә арттырыласаҡ. Әлегә ул һәр йыл башында унан алдығы инфляцияны иҫәпкә алып башҡарыласаҡ, тип хәбәр итә төбәк Социаль фонд бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

Мәғлүм булыуынса, эшләүсе пенсионерҙарҙың страховка пенсияһы 2016 йылдан бирле индексацияланмай. Арттырыласаҡ бөтөн пенсия уларҙың иҫәп документында теркәлә барасаҡ, һәм эштән киткән осраҡта улар эшләгән осорға индексацияланған түләүҙәр аласаҡ. Ҡабул ителгән үҙгәрештәр арҡаһында хәҙер страховкалы пенсияларҙың бөтөн төрҙәре, шул иҫәптән инвалидлыҡ буйынса һәм ҡараусыһын юғалтыу менән бәйле пенсиялар ҙа хеҙмәт эшмәкәрлегенә ҡарамаҫтан, индексацияланасаҡ. Арттырыу механизмының үҙенсәлеге шунда: индексация түләнеүсе пенсияға ҡарап түгел, ә башҡарылмаған индексацияларҙы иҫәпкә алып, уның арттырылған юғарыраҡ күләме буйынса түләнәсәк. Мәҫәлән, әгәр эшләп йөрөүсе пенсионер 14 мең һум пенсия ала икән, башҡарылмаған индексацияларҙы иҫәпкә алып, бынан алдағы өс йыл өсөн пенсия 23,4 мең тәшкил итәсәк. Был пенсионерҙың иҫәп ҡағыҙында теркәлгән иң юғары күләм һәм индексация шуға нигеҙләнеп иҫәпләнә.

Киләһе йылдан эшләүсе пенсионерҙарға индексация автоматик рәүештә башҡарыласаҡ, уның өсөн ҡайҙалыр барып, ҡағыҙҙар юллап йөрөү кәрәкмәй. Башинформда әлегерәк хәбәр ителеүенсә, 1 августа Рәсәй Социаль фондтың Башҡортостан бүлексәһе тарафынан республиканың 2023 йылда эшләгән пенсионерҙарының страховкалы пенсияларына ғариза яҙҙырып тормайынса, ҡабаттан иҫәпләүҙәр башҡарылды. Был ҡайтанан иҫәпләүҙәр былтыр эш биреүселәре страховка взносы түләгән йәшe һәм инвалидлыҡ буйынса 213 мең пенсионерға ҡағыла.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә М. Ғафури паркын яңыртыу эштәре кимәле 90 процент тәшкил итә. "Тротуар плитәләре һалыу һәм балаларҙың уйын майҙансыҡтарын төҙөкләндереү буйынса эштәр тамамланыу алдында, - тип белдерә Октябрь районы хакимиәте башлығы Сергей Плотников. - Әле эскәмйәләр урынлаштырабыҙ. Шулай уҡ эттәр йөрөтөү өсөн махсус майҙансыҡ та әҙер". Хакимиәт башлығы билдәләүенсә, паркты төҙөкләндереү - баш ҡала эшҡыуарҙарының Өфө ҡөлгәнһенә 450 йыллығына бүләге ул.

✓2025 йылдың май байрамдарында Рәсәй халҡын һигеҙ көнлөк ял көтә, тип хәбәр итә ТАСС илдең хеҙмәт министрлығы проектына һылтанма менән. Шулай итеп, 1-4 май һәм 8-11 май - ял көндәре. Бынан тыш, июнь айында дүрт көн рәттән ял итеү мөмкинлеге була.

✓Башҡортостан спортсыһы Алһыу Минәзова йәнә ишкәкле слалом буйынса Рәсәй чемпионы булды. Ул ишкәкле слаломдың яңы "спринт-уҙыш" категорияһында алтын миҙал яуланы, тип хәбәр ителәр республиканың Спорт министрлығынан.Алһыу Минәзова Мәскәү өлкәһенең Богородск ҡалаһында "Иң көслөләр кубогы" Бөтә Рәсәй старттарында ҡатнашты. Спортсылар төүге тапҡыр конкурстан тыш программала яңы "спринт-уҙыш" арауығын үтте. Алһыу Минәзова ҡатын-ҡыҙҙар араһында каноэла яңғыҙ йөрөүҙә беренсе булды.

✓2030 йылға тиклем Башҡортостанда йәшәгән һәр кеше иҫәбенә 34,5 квадрат метр торлаҡ булырға тейеш - Башҡортостан Хөкүмәте "БР төҙөлөш комплексы һәм архитектураһы үҫеше" дәүләт программаһы ҡабул итте. Ул 2024 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә. Уға ярашлы, 2030 йылға тиклем граждандарҙың айырым категорияларына ҡараған 153,28 мең ғаиләне комфортлы торлаҡ менән тәьмин итеү, шулай уҡ төҙөлгән торлаҡтың сифатын күтәреү, төбәктә төҙөлөш өлкәһенең модернизациялау ҡаралған.

✓Өфөнөң Ҡасимов урамындағы 10-сы йорттоң подъезына ингән урында бер төркөм балалар уйнап йөрөгән. Ҡапыл бер ҡыҙҙың: "Ой, әсәй!" тип ҡысҡырған тауышы ишетелгән. Әхирәттәре ҡанды күреп ҡысҡырып ебәргән. "БашДТП" телеграм-каналындағы хәбәрҙең авторы һүҙҙәренсә, билдәһеҙ кеше балаға пневматик ҡоралдан атҡан. Ҡыҙ ашығыс ярҙам менән дауаханаға оҙатылған. Табиптар пуляны алған. Полиция хәҙер атыусыны эҙләй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# МЕДИЦИНА СЕРҘӘРЕН АСЫР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә геном үҙәге төҙөлөүе хаҡында белдерҙе. Ул Евразия белем биреү үҙәгендә Вуз-ара студент кампусының икенсе сираты сиктәрендә башҡарыла.**

"Геном үҙәгендә фундаменталь һәм ғәмәли биомедицина тикшереүҙәре ойоштороласаҡ. Ул махсуслаштырылған үҙәк, бында шәхсиләштерелгән медицина, генетикала яһалма интеллект, биоинформатика һәм башҡалар. Бында шулай уҡ мәғлүмәт технологиялары өлкәһендә дисциплина-ара проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу күҙаллана. Бина 4 ҡаттан тора, уның дөйөм майҙаны - 5,5 мең кв. м. Унда заманса иң яҡшы йыһаздар ҡуп буласаҡ. Бөгөн беҙ медицина, генетика һәм яһалма интеллектты үҫтереү өлкәләрендә алға китеште тәьмин итерлек ҡеүәтле инфраструктура базаһын булдырабыҙ", - тип яҙа үҙенең социаль селтәрҙәрендә Радий Хәбиров. Уның белдереүенсә, геном үҙәге төҙөлөшөн декабрҙә тамамлау күҙаллана.

# БЕҘҘЕҢ ФЛАГ...

**Төньяҡ ҡотопта Өфөнөң 450 йыллығына арналған флаг елберҙәй, тип хәбәр итте "Еңеүгә 50 йыл" атом боҙваткысындағы экспедиция составына ингән баш ҡалабыҙҙың Йәмәғәт палатаһы рәйесе Ольга Одинокова.**




Билдәле сәйәхәтсе Федор Конюхов, шулай уҡ "Еңеүгә 50 йыл" атом боҙваткысы командиры Руслан Сасов өфөләргә теләктәр яҙып, флагҡа ҡултамғаларын ҡуйған. "Мәр беҙгә әһәмиәтле дата - Өфөнөң 450 йыллығы билдәләнгән флагты Төньяҡ ҡотопҡа алып барыу мөмкинлеге бирҙе, - тине Ольга Одинокова. - Беҙ Федор Филиппович менән аралаштыҡ. Ул Өфөнө юбилейы менән ҡотланы һәм ҡала халҡына иң изге теләктәрен еткерҙе".

Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, экспедицияның төп маҡсаттарының береһе - донъя рекордтары ҡуйыу. Мәҫәлән, Федор Конюхов пилот Игорь Потапкин менән боҙҙан паралетта осоп китеп, ҡатмарлы һауа шарттарында 440 километр ара үтеп, туп-тура Төньяҡ ҡотопҡа төштө. Бер кемдең һис ҡасан ошондай киңлектәрҙә һәм алыҫлыҡҡа паралетта осҡаны юҡ ине. Тағы бер рекорд - Төньяҡ полюста боҙваткыс палубаһы буйлап 50 километрға йүгереү. Владимир Волошин дистанцияны 5 сәғәт 26 минут эсендә үтте. Тағы ла дүрт кеше боҙваткыс буйлап 21 саҡрымға ярыммарафон йүгерҙе.

# ФИЛЬМ ТӨШӨРӨЛДӨ

**Рәсәйҙең "Белем" йәмғиәте хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалалары хаҡындағы документаль циклдың 4-се фильмын төшөрҙө. Был юлы фильм Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөгә арналған, һәм ул баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығын байрам иткәндә символик мәғәнәгә эйә.**

Яңы серияла баш ҡалабыҙҙың өс ҙур предприятиһы - Өфө моторҙар етештереү берекмәһе, Өфөнөң "Восход" икмәк бешереү берекмәһе һәм "Өфө нефть эшкәртеү заводы" хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерелә. Фильмды төшөргәндә ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ҡатнашты. "Яңыртылған иҡтисад предприятиелары булдырыу мөһим, улар, Өфөнөң тороп, үҙҙәре етештергән продукцияны һәм хеҙмәттәрҙе барса донъяға тарата ала. Беҙҙә ундай предприятиелар 100-ҙән ашыу. Улар бөгөн ҡулланыусыларға кәрәкле һәм яңы иҡтисад һәм цифрлы трансформация шарттарында эшләй", - тип белдерҙе ҡала етәксеһе.

Өфө тураһындағы документаль фильмдың исем туйы 16-17 июлдә Мәскәүҙә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалалары. Һөҙөмтәлә кадрҙар ҡуҙғағы" тип аталған Бөтөн Рәсәй форумының мәғариф модуле сиктәрендә уҙғарылды.

# КИТАП ЯҘЫЛДЫ

**Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә Анатолий Чечуханың "Уфимская мозаика: справочник по старой и новой Уфе" тип исемләнгән китабы баҫмаға әҙерләнде. Был баҫма өфөләргә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына тәғәйенләнгән.**

Бөгөн миллиондан ашыу кеше йәшәгән Өфөбеҙ Рәсәйҙең иң ҙур ҡалалары иҫәбенә инә. Баш ҡалабыҙҙың иң ҙур байлығы - унда тыуған, йәшәгән, хеҙмәт иткән кешеләр. Улар араһынан күренекле ғалимдар, мәҙәниәт, сәнғәт һәм әҙәбиәт әһелдәре сыҡты. XIX быуатта йәшәгән күренекле яҙыусы Сергей Аксаковтың бала сағы Өфөлә уҙа. Талантлы рәссам Михаил Нестеров, яҙыусы Сергей Довлатов, скрипкала уйнау оҫтаһы, дирижер Владимир Спиваков, барса донъяның опера залдарында дан ҡаҙанған йырсылар Асҡар һәм Илдар Абдразаковтар Өфөлә тыуған. Өфөлә опера спектакленән һуң донъяның иң оҫта басы булып танылған Федор Шаляпин тәүләп сығыш яһай, күренекле балет артисы Рудольф Нуриев та Өфөлә йәшәгән.

Китапта шулай уҡ Өфө урамдары тарихы, ҡала мәҙәниәтенең, сәнғәтенең, мәғарифы һәм фәненең сағыу факттары, ҡала тарихының төрлө эпохаларында танылыу тапҡан кешеләр яҙмышы менән танышырға мөмкин. Шулай уҡ архивтан алынған һәм хәҙерге осорҙо сағылдырған фотоһүрәттәр баҫманы ҡыҙыҡлы итә.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Балалар, йәштәр фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһен өсөн ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан арҙаҡлы шәхестәребеҙ хаҡында һөйләйбеҙ.**

## АБДРАЗАҠОВ ӘМИР ҒӘБДЕЛМӘН УЛЫ

Ә.Ғ. Абдразаҡов - театр актёры, билдәле кинорежиссёр, сценарий яҙыусы. Ул Абдразаҡов 1934 йылдың 15 ғинуарында Ырымбур өлкәһе Александровка районы Ҡәйепҡол ауылында тыуған. Ауыл мәктәбен тамамлағас, 1954 йылда Мәскәүҙәге А. В. Луначарский исемендәге Дәүләт театр сәнғәте институтына (ГИТИС) уҡырға инә һәм уны О. И. Пыжков һәм Б. В. Бибиков класы буйынса тамамлай. 1959 йылдан 1962 йылға тиклем Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында актер булып эшләй.

1962 йылдан БАССР Министрҙар Советы ҡарамағындағы Телевидение һәм радио тапшырыуҙары комитетына режиссёрлыҡ эшенә күсерелә. Ф. Ғ. Биишев менән берлектә Яныбай Хамматовтың "Бөртөкләп йыйыла алтын" (1979) һәм Ғәли Ибраһимовтың "Кинйә" романдары буйынса тәүге күп сериялы телевизион нәфис фильмдар төшөрә.

Башҡортостанда киностудия ойоштороу буйынса эш алып бара, һөҙөмтәлә 1990 йылдың 25 майында Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ҡарарына ярашлы Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағында "Башҡортостан" киностудияһы ойошторола. Киностудияның беренсе директоры итеп Әмир Абдразаҡов тәғәйенләнә.

1994 йылдан Өфө сәнғәт училищеһында уҡыта.

2008 йылдың 6 мартында Өфө ҡалаһында вафат була, Мосолман зыяратында ерләнгән.

Маҡтаулы исемдәре һәм башҡа бүләктәре: Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1974), Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (2006), Зәйнәб Биишева исемендәге премия лауреаты (2010, үлгәндән һуң).

Барлығы иллегә яҡын телефилм төшөргән. Билдәле телефильмдары:

"Халҡым һағышы" - 1969 йыл; "Туй" -1970 йыл; "Күңел ҡанаттары" - 1970 йыл; "Заһир Исмәғилев" - 1986 йыл; "Халыҡ шағиры" - 1990 йыл; "Революционер-дипломат" - 1992 йыл.

Кинофильмдары: "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" - 1990 йыл; "Аҡмулла" - 1990 йыл; "Ишмулла" - 1991 йыл.

2018 йылдың декабрендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте "Башҡортостан" киностудияһына Әмир Абдразаҡов исемен биреү тураһында ҡарар ҡабул итте.

Әмир Ғәбделмән улы Абдразаҡовтың улдары Илдар һәм Асҡар Абдразаҡовтар - донъя кимәлендә танылыу тапҡан опера йырсылары: Асҡар Абдразаҡов - Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, Илдар Абдразаҡов - шулай уҡ Башҡортостандың халыҡ, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, Рәсәй Федерацияһының дәүләт премияһы лауреаты.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Баклажан

Баклажан күп йыллыҡ үҫемлек. Ул шарттарға ҡарап, сәскәндән һуң 2-3 ай үткәс сәскә ата. Шунан 100-130 көн үткәс йәшелсә өлгәрөп етә. Баклажанда шәкәрҙәр, крахмал һәм күҙәнәк тиресәләре күп. Ул флавоноидтар сығанағы. Калий, тимер, марганец та унда күп. Халыҡ дауаһында уның өлгәргән йәшелсәһен ҡулланалар. Баклажандың бөйәл ҡыуҙырғыс, ҡан барлыҡҡа килтереүсе, бактерияларға ҡаршы сифаттары бар, шулай уҡ ҡанда холестерин кимәлен дә түбәнәйтә ала.

❖ Атеросклероз, нефрит, бәүелдә таш булғанда баклажанды күберәк ашарға кәрәк. Бер яңы баклажан һутын һығып, көнөнә 2 тапҡыр 1/4 стакан эсергә лә була.

❖ Аҙканлылыҡтан көн һайын 1 баклажан ашарға. Уның составында күп булған баҡыр ҡан барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә.

❖ Артрит, быуындар ревматизмы, подагра ауырыуҙарынан 1 балғалаҡ соданы 0,5 литр ҡайнар һыуға иҙеп һыҙлаған урынды ыуырға һәм киптереп бешекләнгән баклажан һалып, өҫтөнән йөн шәл ябырға. 3 сәғәттән баклажанды алып ташларға, быуындарҙы һалҡын һыу менән сайҡатып, үлән майы һөртергә.

## Ҡара көртмәле

❖ Шәкәр диабетынан 1 ҡалаҡ киптерелгән ҡара көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30-40 минут йылыға төрөп төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан төнәтмәне һыуыҡ көйөнсә аҙ-аҙлап уртлап эсергә. Диабеттың башланғыс осоронда ҡулланыла.

❖ Оҙайлы эс китеүҙән 40 грамм кипкән ҡара көртмәлегә 1 стакан һыу ҡойоп, 20 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Шулай уҡ 50-100 грамм ҡара көртмәле ашау йәки кипкән емешенән түбәндәгесә төнәтмә яһау ҙа яҡшы сара: 4 балғалаҡ кипкән емешкә бүлмә температураһындағы 1 стакан һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә һәм көн дауамында уртлап эсеп бөтөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Сел, божор**
**(Рябчик)**



Тауыҡ һымаҡтар отрядына бытбылдыҡ кеүек ваҡ ҡоштарҙан алып һуйыр кеүек эре ҡоштар ҡарай. Улар ныҡлы кәүҙәле, көслө аяҡлы, тупраҡты соҡоу өсөн яҡшы ҡулайлашҡан тырнаҡлы. Ҙур тиҙлектә осалар, был ваҡытта киң һәм ҡыҫҡа ҡанаттарын йыш-йыш ҡағалар. Ғәҙәттә, ата ҡоштар инә ҡошҡа ҡарағанда ҙурыраҡ һәм төҫкә лә сағыуыраҡ. Ояларын ергә ҡоралар, бәпкәләре йорт тауығының бәпкәләренә оҡшап тора, бары тик төҫтәре сыбар һәм улар беренсе көндән үк үҙен-үҙе туйҙыра ала. Үҫемлектәр менән туҡланалар, йәйен бөжәктәрҙе лә ашайҙар.

Сел иһә был төркөмдөң ҡорҙар ғаиләһенә ингән ҡош. Ҡорҙар ғаиләһенең Көньяҡ Уралдағы вәкилдәре тип сел, ҡор, һуйыр һәм аҡ ағуналарҙы иҫәпләйҙәр. Улар урманда йәшәй, ҡышын ҡарға күмелеп йоҡлай.

Сел күгәрсендән ҙурыраҡ, бызырмаҡ арҡыры һыҙатлы ерән-һоро төҫтә, түшендәге һәм ҡорһағында киң аҡ һыҙаты бар. Ата селдең боғаҙында ҡара тап бар. Сел тауыш сығарып осоп китә, әммә ергә кире тауышланмай ғына ултыра. Парлап йәшәйҙәр, көҙ башланыуға 3-10 бәпкәһе лә эйәреп йөрөгәнен күрергә була.

Урман буйлап аҡҡан бәләкәй йылға һәм шишмәләр үҙәндәрендә оя ҡора. Урмандың ҡуйы булғанын ярата. Яҙын ата ҡоштар ныҡ тауышланып "йырлап", ағастан ағасҡа осоп йөрөй. Йығылған ағастың аҫтына оя ҡороусан. 7-10 йомортҡа һала, улар көрән таплы, ҡыҙғылт һары төҫтә. Инә ҡош ояһынан төшмәй уларҙы баҫып сығара.

Үлән, орлоҡтар, еләктәр, бөжәктәр менән туҡлана. Ҡышын ағастарҙың, башлыса ерек менән ҡайындың бөрөһөн, "алҡа"һын, йәш ботаҡтарын ашай.

Ҡаты сасҡау һыуыҡтарҙы ҡар аҫтында үткәрә, ашар өсөн генә сыға.

Урманлы райондарҙың барыһында ла осрай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# КӘЙЕФ...

## тупһанан башлана

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса 2019 йылдан алып республикала күп фатирлы йорттарҙың (МКД) подъездарын комплекслы ремонтлау буйынса программа бойомға ашырыла. 2019-2023 йылдар эсендә 8171 подъезд яңыртылды һәм ағымдағы йылда тағы ла 119 подъезд рәткә килтереләсәк. "Башинформ"дың был мәҡәләһендә ошо программаны ғәмәлгә ашырыу хаҡында бәйән ителә.**



Уңайлы һәм йыйнаҡ фатирҙа йә үҙ йортонда йәшәргә теләмәгән кеше юҡтыр ул. Тик бына ҡалалағы күп фатирлы йорттарҙың ҡайһы бер подъездары һәм баҫҡыс майҙансыҡтарын йыйнаҡ һәм матур тип әйтеп булмай, әлбиттә, сөнки уларҙың күбеһе ремонт һәм яңыртыу талап итә. Был мәсьәләгә 2018 йылда уҡ республикаға етәкселек итә башлаған Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иғтибар итте һәм төбәктә уңайлы мөхит булдырыу, парктарҙы, йорт яны биләмәләрен һәм подъездарҙы төҙөкләндереү кәрәклеген билдәләне. Шулай итеп, 2019 йылда ошо йүнәлештә эш башланды. Программаның төп маҡсаты - кешеләргә, әлеге осраҡта күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр өсөн уңайлы шарттар булдырыу. Был турала 2018 йылдың ноябрендә муниципалитеттар хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәре менән кәңәшмәлә Радий Хәбиров былай тигәйне: "Мин һәр ваҡыт кешенең кәйефе ниҙән ғибәрәт булыуы хаҡында телгә алам. Мәҫәлән, ул иртә менән тора һәм бысраҡ подъезға сыға, ә ихатала шул уҡ хәл: тубыҡтан бысраҡ - бына кәйеф шунан да боҙола бит. Ә инде ул сәскәләр менән биҙәлгән, яҡты, таҙа подъезға килеп сыға икән - был бөтөнләй икенсе хәл. Шуның өсөн кешеләргә уңайлы мөхит тыуҙырыу мөһим..."

Әйтеп кителеүенсә, 2019-2023 йылдар эсендә 2744 йорттағы 8171 подъезда ремонт үткәрелде. Шуныһы ла мөһим: был эштәрҙе башҡарыуға республика һәм муниципалитеттар аҡса күсерҙе. Телгә алып кителгән осорҙа подъездарҙы капиталь ремонлау өсөн 3,5 млрд һум аҡса йүнәлтелде. Шуның 3,2 млрд һумы - республика бюджетынан бүленһә, 330 млн һумы - муниципалитеттар өлөшө. Бынан тыш, 5 йыл эсендә 2,7 мең лифт яңыларына алыштырылды. Әйтелеүенсә, подъездарҙы ремонтлау фәҡәт дәүләт иҫәбенә башҡарыла. Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр тарафынан унда үҙ аҡсаларынан өлөш индереү талап ителмәй. Граждандар бары тик дизайн, буяу төҫтәрен һайлау кеүек эштәрҙә ҡатнаша һәм әҙер һөҙөмтәне ҡабул итә. Подъездары ремонтланасаҡ йорттар исемлеге муниципалитет хакимиәттәрендә раҫлана. Теге йәки был йортто ошо исемлеккә индереү өсөн йорт (фатир) милекселәренең дөйөм йыйылышы үткәрелә һәм ошо программала ҡатнашырға теләк белдереп, йыйылыш ҡарары район хакимиәтенә ебәрелә. Подъездарҙы ремонтлау инеү урындарын йүнәтеү, беренсе ҡат иҙәненә керамиканан плитәләр түшәү, яңы ишектәр, пластик тәҙрәләр ҡуйыу, почта йәшниктәрен яңыртыу, яҡтыртҡыс лампалар элеү, йөҙләү-буяу эштәрен үҙ эсенә ала. Эш барышы төбәк капиталь ремонт операторы һәм уның хеҙмәткәрҙәре тарафынан күҙәтелә. Подъезға инеү урынында физик мөмкинлектәре сикле инвалидтар, балалар арбалары һәм өлкәндәр өсөн уңайлыҡтар ҡаралған. Күп фатирлы йорттар фатирҙарында йәшәүселәр ремонт эштәренән ҡәнәғәт һәм ихлас рәхмәттәрен белдерәләр.

Әйткәндәй, кемдәрҙең йорто программаға инмәй ҡалған, борсолорға кәрәкмәй, сөнки был эш киләсәктә лә дауам итәсәк әле. Быйыл да ул тулы ҡеүәтенә эшләй: ағымдағы йылда, мәҫәлән, Өфөлә 24 йортта 77 подъезды төҙөкләндереү ҡарала. Подъездарҙы ремонтлау - уңайлы мөхит булдырыу буйынса комплекслы программаның бер өлөшө генә. Бынан тыш, тағы "Башҡортостан ихаталары" программаһы ла ғәмәлдә. Мәҫәлән, Башҡортостанда ошо йүнәлештә төҙөкләндерелгән 1326 йорт ихатаһы республика халҡының ятаҡан ял итеү урынына әүерелде. Ҡала мөхите сифаты индексы буйынса былтырғы йылда республиканың 21-ҙән 17 ҡалаһы йәшәү өсөн уңайлы тип табылды.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҒАИЛӘ АЛЛЕЯЛАРЫ

**Башҡортостанда йәмәғәт арауыҡтарын әүҙем рәүештә төҙөкләндереү дауам итә.**

Өфөнөң Дим районында, "Яркий" микрорайонында Ғаилә аллеяһын булдырасаҡтар, тип хәбәр итә ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәте. Аллея исемле ағастарҙан торасаҡ, был үҙе үк ғаилә, быуындар күсәгилешлеге, Тыуған илгә, йәшәгән ергә һөйөү кеүек традицион ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм үҫтереүҙең һәйбәт миҫалы. Әлеге көнгә эшсе төркөм булдырылған, аллеяның урыны билдәләнгән. Аллеяның проекты эшләнгән, уның макеты ла бар. Ағастар ултыртыу сентябрь баштарында күҙаллана.

"Ойоштороусылар ошо проект баш ҡалабыҙҙың башҡа микрорайондарында ла ғәмәлгә ашырылып, ҡалабыҙҙың бер матур традицияһына әйләнер, тип уйлай. Проекттың төп идеяһы - унда ҡатнашҡан һәр ғаилә үҙенең ағастарын үҙе ҡарап тотор һәм артабан ошо "эстафета"ны киләсәк быуындарға тапшырасаҡ. Ғаилә йылында ошо проект бигерәк тә көнүҙәк булып тора", - тиҙәр Өфө ҡалаһы хакимиәтендә.

# ҠАЯҺЫ БУЛМАҺА ЛА...

**Өфөлә 15-метрлыҡ ҡаядром асыла, әлегә тиклем республикала бындай спорт объекты булманы.**

Ҡаяға спорт үрмәләүе менән шөғөлләнеүселәргә 3 август көнө ысын байрам буласаҡ, ҡаядромдың адресы - Өфө ҡалаһы, Ростов урамы, 18. Байрамға килеүселәр ҡаяға үрмәләүселәр турнирын күрә ала, приздар һәм бүләктәр отошо була. Әлбиттә, беҙҙә әллә ни үҫешмәгән спорт төрө өсөн яңы мөмкинлектәр асыла.

Ҡаядром "Астра - спорт территорияһы" тип аталған проект сиктәрендә төҙөлдө."Беҙ яңы ҡаядром республикаға ошо өлкәлә танылыу тапҡан спортсыларҙы йәлеп итер, тип уйлайбыҙ, - тип белдерҙе "Астра - спорт территорияһы" проектын нигеҙләүсе Венер Ғимазетдинов. - Хәҙер башҡа ҡалаларҙан ҡаяға үрмәләүселәр командалары йыйынға килә, ә Өфө спортсылары иң юғары кимәлдә шөғөлләнә аласаҡ".

"Астра" дирекцияһы был яңы спорт объектын төҙөүгә булышлыҡ иткән БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Тимур Хәкимовҡа рәхмәт белдерҙе. Уның ярҙамы һөҙөмтәһендә халыҡ-ара стандарттарға яуап биргән заманса спорт йыһаздары алынды. Ошо спорт үҙәгендә башҡа спорт төрҙәре - художестволы гимнастика, хоккей, конькиҙа фигуралы шыуыу, футбол, волейбол, баскетбол, гандбол, фехтование, спорт бейеүҙәре менән шөғөлләнеп була, теләктәре булғандар өсөн тренажерҙар бар.

# ЭТНО АУЫЛ ЯҢЫРТЫЛА

**Өфөнөң тарихи үҙәгендә "Этно ауыл" комплексын төҙөкләндереү эштәре бара. Ул Чернышевский һәм Мостай Кәрим урамдары киҫелешендә, Арт-квадратҡа яҡын урынлашҡан. Этно ауыл баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығына әҙерләнеү эштәре сиктәрендә асылғайны.**

Быйыл республикабыҙҙа барлығы 123 йәмәғәт арауығы "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" тигән федераль проектҡа ярашлы төҙөкләндерелә. Шулай уҡ Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡарары буйынса "Тораҡ һәм ҡала" проекты ла бойомға ашырыла.

"123 объекттың 67-һе - ҡалаларҙа, 56-һы ауылдарҙа төҙөлә. Быйыл төҙөкләндерелә башлаған йәмәғәт арауыҡтарының бер өлөшөн нулдән башланыҡ. Бына, мәҫәлән, Өфөләге Башҡортостан урмансылары паркында киң күләмле үҙгәрештәр башланасаҡ", - тип яҙғайны февраль айында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Һуңғы биш йылда "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" тигән федераль проект буйынса республикала 683 объект төҙөкләндерелде. Проект өсөн бүленгән 7 млрд һум аҡсаның 91 проценты федераль бюджеттан алынды", - тине республика етәксеһе.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

24

# Ғаилә-ҡәлғәм

2-8 август (урағай)
2024 йыл
№30 (1123)

ТӨРЛӨҺӨНӘН



## МӘКТӘПКӘ БАРЫУСЫЛАРҒА

**1 июлдә Башҡортостанда 14-се тапҡыр "Мәктәпкә әҙерләнергә ярҙам ит" хәйриә акцияһы башланды. Уның төп маҡсаты - аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләргә, тулы булмаған ғаиләләргә, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләгән ата-әсәләргә ярҙам итеү.**

"Бәхет биләмәһе" хәйриә фонды ғаиләләргә ярҙам күрһәтеүҙә әүҙем ҡатнаша. Республиканың Ғаилә һәм хеҙмәт министрлығына балаларға ярҙам йөҙөнән рюкзактар, канцелярия тауарҙары килтерелде. Тимәк, ҡала һәм районларҙағы "Ғаилә үҙәктәре"нә яңы мәктәп кәрәк-яраҡтары тапшырыла башлай, тип хәбәр иттеләр ведомствола. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, акцияла ойошмалар, муниципаль власть органдары ла ҡатнашырға мөмкин. Тик канцелярия кәрәк-ярағы һәм ижад өсөн тауарҙар яңы булырға тейеш. Портфель, мәктәп формаһы, уҡыу әсбаптары, нәфис әҙәбиәт яңы йәки яҡшы торошта ҡабул ителә.

## СТУДЕНТ ӘСӘЙҘӘР ҘӘ...

**Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы мәктәпкәсә йәштәге балалары булған юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән ата-әсәләр өсөн минималь хеҙмәт хаҡы күләмендә айлыҡ социаль стипендия булдырыу тәҡдиме менән сығыш яһаны.**

Түләүҙе "Ғаилә" милли проектына индерергә тәҡдим ителә, тип белдергәндәр ТАСС агентлығына министрлыҡтың матбуғат хеҙмәтендә. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, илдең 452 университетында уҡыған ваҡытта бала тапҡан ҡатын-ҡыҙҙарға матди ярҙам түләнә башлаған да инде. Шулай уҡ 347 вузда яңғыҙ әсәйҙәргә йәки атайҙарға матди ярҙам күрһәтелә. Әйткәндәй, 2024 йылда минималь эш хаҡы күләме (МРОТ) - 19 242 һум. 2025 йылдан ул хеҙмәт баҙарындағы медиан эш хаҡынан сығып иҫәпләнә. Уның күләме 15 проценттан артып, айына 22 мең һумдан ашыу тәшкил итер тип көтөлә.

## КҮҘӘТЕҮ КӨСӘЙТЕЛӘ

**Дәүләт Думаһы педофилия өсөн хөкөм ителгәндәргә балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу менән бәйле белем биреү ойошмаларына, ял итеү, һауыҡтырыу һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн тәғәйенләнгән объекттарға һәм территорияларға йөрөүҙе тыйған закон ҡабул итә. Был хаҡта Дәүләт Думаһының телеграм-каналында хәбәр ителә.**

"Был балиғ булмағандарҙың азатлығына ҡаршы енәйәт ҡылған кешеләрҙе күҙәтеүҙе көсәйтергә мөмкинлек бирәсәк", - тип асыҡлыҡ индерелә Дәүләт Думаһы белдереүендә. Төҙәтмәләр "Төрмәнән азат ителгән кешеләрҙе административ күҙәтеү тураһында" Федераль закондың 4-се статьяһына индерелгән. "Төҙәтмәләрҙе ҡабул итеү уларҙы башҡа күҙәтеү сараларынан азат итмәй, шул иҫәптән улар айына дүрт тапҡыр эске эштәр органдарына килергә тейеш", - тип өҫтәнеләр Дәүләт Думаһында.

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

**Сабыйҙың яҡты донъяға килеүе һәр бер ата-әсә, уларҙың туғандары өсөн дә көтөп алынған ҡыуанысłы ваҡиға, шул уҡ ваҡытта был йәһәттән финанс мәсьәләһенең дә мөһим булыуын танырға кәрәк, сөнки ғаиләнең яңы ағзаһының һаулығы һәм именлеге өсөн әсәнең йөклө сағынан уҡ күпмелер күләмдә сығымдар түгеү талап ителә бит. Әлбиттә, был сығымдарҙы өлөшләтә дәүләт ҡаплауы һәм шуның менән ғаиләләргә ҙур ярҙам күрһәтелеүе хаҡында беләбеҙ. "Балалары булған ғаиләләрҙең дәүләт тарафынан һәр кимәлдә ярҙамға һәм күтәрмәләүгә мохтаж булыуы билдәле. Ғаилә йылында беҙ был ярҙамды тағы ла көсәйтә төшәбеҙ", - тип яҙғайны йыл башында үҙенең социаль сәхифәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Шуны ла әйтергә кәрәк: Башҡортостанда сабыйы тыуған һәр бер ғаилә, матди хәле һәм балалары күпме булыуға ҡарамаҫтан, бөтәһе лә дәүләт ярҙамына иҫәп тота ала. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ҡайһы берҙәре - күп балалы, аҙ тәьмин ителгәне, яңғыҙ әсәләр һәм инвалид балаларҙың ата-әсәләре өҫтәмә ярҙамға лайыҡ. Яңы тыуған сабый ғаиләһенә ниндәй күләмдә ярҙам төрҙәре күрһәтелеүе хаҡында ентекләберәк ошо мәҡәләлә уҡый алаһығыҙ.**

# ДӘҮЛӘТ ЯҠЛАУЫНДА БУЛЫУ...

## ғаилә нигеҙен ышаныслы итә



● Берҙәм пособие айлыҡ килеме ғаиләһендәге кеше башына йәшәү минимумының Башҡортостанда билдәләнгән күләменән артмаған ҡатындарға һәм шулай уҡ 0-17 йәшлек балалары булған осраҡта ғаилә килеменең һәр бер ағзаға өлөшө йәшәү минимумынан кәм булғанда. Пособие тәғәйенләгәндә ғаиләнең милек хәле иҫәпкә алына. Пособие ғаиләнең өлкән ағзалары эш хаҡы алһа йәки объектив сәбәптәр менән унан мәхрүм булғанда түләнә.

Пособие күләме бөтәһенә лә бер тигеҙ түгел, ул ғаилә килеменә һәм төбәктәге йәшәү минимумына бәйле.

● 17 йәшкә тиклемге балаларға түләүҙең нигеҙ күләме - 6 670 һум (балалар өсөн тәғәйенләнгән йәшәү минимумының 50 проценты).

● Әгәр ошо күләмдә лә ғаилә килеме минимумдан түбән ҡала икән, бындай ғаиләгә 10 005 һум (һәр балаға йәшәү минимумының 75 проценты) түләнә.

● Был сумма ла етерлек түгел икән, һәр балаға 13 340 һум (балалар өсөн минимумдың 100 проценты) түләнә.

Был түләүҙе алыу өсөн ауырлы ҡатын РФ Социаль фондына йәки йәшәгән урыны буйынса Күп функциялы үҙәккә (МФЦ) мөрәжәғәт итә йәки Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша хәл итә ала.

Бала тыуғандан һуң бер тапҡыр түләнеүсе пособие бөтөн ғаиләләргә лә бирелә. Эшләп йөрөүсе ата-әсәнең береһенә ғариза яҙмайынса ла бала тыуғандан һуң уны теркәү факты буйынса РФ Социаль фонды тарафынан түләнә. Бер ҡайҙа ла эшләмәгән хәлдә Рәсәй Социаль фондының клиент хеҙмәтенә мөрәжәғәт итергә.

Яңы тыуған сабыйҙарға бүләк йыйылмаһы ла бөтә ғаиләләргә лә бирелергә тейеш. Йыйылмала сабыйҙы тыштан биләй торған өсмөйөшлө юрған, кофта, күлдәк-ыштан, башлыҡ, янғын хаҡында иҫкәртеү приборы, сумка, одеял, бәйләнгән комбинезон.

● Ауырлы һәм бала имеҙеүсе әсәләргә тәғәйенләнгән махсуслаштырылған туҡланыу аҙығы аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ауырлы ҡатын йөклөлөк буйынса иҫәпкә теркәлгәндең киләһе айынан бала тыуғанға тиклем, шулай уҡ бала имеҙеүсе әсәгә сабыйына 6 ай тулғансы бирелә. Бушлай балалар аҙығы шулай уҡ аҙ тәьмин ителеүсе ғаиләләргә бала тыуғандан алып 3 йәшкәсә һәм МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларына бирелә.

Балаға йәш ярым тулғансы түләнә торған айлыҡ пособиены бөтөн ғаиләләр ҙә ала. Уның күләме 10 611,33 һумдан алып йәки эшләгән кешеләр өсөн ике йыл алдағы уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмендә, ә инде 2024 йылда тәғәйенләнгән осраҡта иң ҙур сумма 49 123,12 һумғаса тәшкил итә. 18 йәшкә тиклем балалары булған аҙ тәьмин ителеүсе ғаиләләр 233,55 һәм унан күберәк аҡса ала.

Ғаилә ипотекаһы 2019 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған балаһы булған, шулай уҡ инвалид бала ҡараған һәм халыҡ һаны 50 меңгә тиклемге ҡалала йәшәгән ғаиләләргә 6 проценттан да юғары булмаған ставка буйынса бирелә.

Бушлай дарыуҙар 3 йәшкә тиклемге бөтөн балаларға ла, шулай уҡ 6 йәшкә тиклемге күп балалы ғаиләләргә бирелә.

Беренсе балаға Әсәлек капиталы тәүгә тыуған (уллыҡҡа, ҡыҙ итеп алынған) балалы бөтөн ғаиләләргә лә тейеш, уның күләме 630 380,78 һум. 2007 йылдың 1 ғинуарынан тыуған (уллыҡҡа алынған) икенсе, өсөнсө балалы ғаиләләргә 2024 йылда, әгәр ғаилә беренсе балаға Әсәлек капиталы алған осраҡта, 202 643,96 һум тейеш. 2020 йылдың 1 ғинуарына тиклем тыуған беренсе, икенсе (уллыҡҡа алынған) бала өсөн - 630 380,78 һум, ә инде шуға тиклем Әсәлек капиталы алмаған хәлдә - 833 024,74 һум.

● Мәҫәлән, Юлиә менән Альберт Нәғимовтар ғаиләһендә яңыраҡ өсөнсөгә ҡыҙ бала тыуған. "Аҙ тәьмин ителгән ғаилә статусына ҡарамағанлыҡтан, беҙгә берҙәм пособие бирелмәй, ләкин күп балалы ғаилә таныҡлығы алыу беҙгә ҡайһы бер өҫтөнлөктәр бирә, мәҫәлән, театр, музейҙарға ярты хаҡҡа йөрөргә мөмкин. Сабыйым тыуғандан һуң мин бер тапҡыр түләнә торған пособие алдым һәм бала ҡарау буйынса 1,5 йыллыҡ отпускыға сыҡтым. Әсәлек капиталы алдыҡ, уны беҙ балаларҙы уҡытыу өсөн тотонорбоҙ, тип ниәтләйбеҙ",- тип һөйләне беҙгә Юлиә.

Ә бына йәш ғаилә - Шәмсетдиновтар ғаилә ипотекаһы буйынса ике бүлмәле фатирлы булғандар. "Дөрөҫ, ипотека түләү өсөн ғаилә бюджетының күп өлөшө китеп тора, ләкин балаларға пособие иш янына ҡуш булып, файҙаһын бирә. Өҫтәүенә, Әсәлек капиталын файҙаланыу ҙа беҙгә ипотека көсөргәнешен еңеләйтә төшә", - тип һөйләй Шәмсетдиновтар.

● Йыш ҡына граждандарҙан шундай һорау ишетергә тура килә: аҙ тәьмин ителеүсе ғаиләләр кемдәр улар? Ғаиләләге уртаса эш хаҡы уның һәр ағзаһына бүлеп иҫәпләгәндә йәшәү минимумынан артмаған осраҡта был ғаилә аҙ тәьмин ителгән тип иҫәпләнә. Башҡортостан буйынса йәшәү минимумы 2024 йылдың 1 ғинуарынан эшкә һәләтлеләр өсөн - 14 991 һум, ә балалар өсөн 13 340 һум тәшкил итә. Кемдәрҙә был йәһәттән һорауҙар тыуа һәм ғаиләгеҙҙең ниндәй дәүләт ярҙамы менән файҙалана алыу хоҡуғы хаҡында ентеклерәк белергә теләһәгеҙ, 8 800 100 00 01 телефоны буйынса шылтырата алаһығыҙ.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# ИГЕҘӘКТӘР

## Ата-әсә уларҙың икеһе ике шәхес икәнен онотмаһын

**Һүҙемде ошо мәҡәләмде яҙырға сәбәпсе булған ваҡиғаларҙың береһенән башлап китәйем. Бөҙрәханаға барған инем. Сират көтөп ултырам. Ҡаршымда бер әсә кеше ике улы менән урын алған. Малайҙары йөҙҙәре һәм кейемдәре менән бер-береһенә шул тиклем оҡшағандар. Уларҙы бер нисек тә айырырлыҡ түгел. Халыҡ теле менән әйткәндә, һуйған да ҡаплағандармы ни. Әсәләре менән һөйләшеп киттем. Малайҙары игеҙәктәр икән. "Ни өсөн уларҙы бер төрлө кейендерәһегеҙ?" тигәнерәк һорау бирҙем. "Бер-береһенән көнләшмәһендәр өсөн, психологтар шулай ҡуша", - тип яуап бирҙе ул.**

Әйтергә кәрәк, ошондай яуапты бөтә игеҙәктәрҙең дә тиерлек ата-әсәләренән ишетергә тура килә. Шулай уҡ игеҙәктәрҙең тормошонда икенсе бер күренеш күҙгә бәрелеп тора: мәктәптә бер парта артында ултыралар, йыш ҡына бер үк түңәрәктәргә йөрөйҙәр, бер үк спорт төрө менән шөғөлләнәләр (һ.б.) - ғөмүмән, тыуғандан алып үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡансы бер-береһенән айырылмайҙар. Хатта икеһе лә ир затынан булғандарға армия сафында бергә хеҙмәт итеү хоҡуҡтары бар.

Игеҙәктәрҙең шулай йөрөүҙәре ата-әсәләре өсөн уңайлылыр, сөнки һәр ваҡыт бер-береһенә күҙ-ҡолаҡ булалар; икенсенән, кейендергәндә лә артыҡ һайланмайһың - икеһенә бер төрлө кейем алаһың да бирәһең, йәғни психологтарҙың кәңәшен үтәйһең. Шулай уҡ бергә йөрөүҙәре ситтән ҡараусыларға ла, бигерәк тә туғандарына, матур булып күренәләр.

Ә бына шундай шарттарҙа тәрбиәләнгән игеҙәктәр үҙҙәре нисегерәк булып үҫә һуң? Үҙаллы тормошта уларҙы ниндәйерәк проблемалар көтә икән? Әллә бөтәһе лә яҡшы буласаҡмы? Мәҡәләмдә бына ошо һорауҙарға яуап бирергә һәм уларҙың тәрбиәһе тураһындағы фекерҙәремде яҙып китергә уйлайым. Алдан уҡ әйтеп үтәм: бындағы яҙылғандар береһе - малай, икенсеһе ҡыҙ затынан булған игеҙҙәргә ҡағылмай. Башта һүҙем холоҡ-фиғелдәре тураһында...

### Игеҙәктәр психологияһы үҙенсәлектәре...

Утыҙ йылдан ашыу күҙәткәндән һәм өйрәнгәндән һуң, мин шундай һығымтаға килдем: әгәр игеҙәктәр тыуғандан алып үҙаллы тормош башлағанға тиклем бер-береһенән айырылмайҙар икән, икеһе бергә бер бөтөн кешегә әүерелә. Әлбиттә, физик яҡтан улар ике кеше, ә психологик яҡтан - бер, йәғни бер кешелә була торған психологик сифаттар икеһенә бүленеп һалына. Ни өсөн тигәндә, оҙаҡ йылдар айырылмайынса бергә йәшәгәс, ниндәйҙер эштәрҙе береһе, ниндәйҙәрен икенсеһе башҡарырға йәки хәл итергә ғәҙәтләнеп китәләр. Бына шулай аҡрынлап береһендә - бер төрлө, икенсеһендә икенсе төрлө сифаттар һәм һәләттәр барлыҡҡа килә башлай.

...Ошо урында күренекле Швейцария ғалимы К.Г. Юнгтың "Психологик типтар" исемле хеҙмәтенең ҡайһы бер урындарын иҫкә төшөрөп үтергә кәрәктер. Уның теорияһы буйынса, кемдеңдер аңында экстравертлыҡ өҫтөнлөк итһә, уның аңтөбөндә интровертлыҡ ята. Йәғни ул кеше ғәҙәти тормошта экстраверт булып йөрөй. Ә ниндәйҙер ғәҙәти булмаған мәлдәрҙә кәрәкле ҡарар ҡабул итергә көсө етмәһә, интровертлыҡ сифаттары өҫкә ҡалҡып сыға - аңтөбө ярҙамға килә. Был бер бөтөн булып формалашҡан кешеләрҙең психологияһы шулай. Әйтергә кәрәк, аңдың аңтөбө менән алмашыныу механизмы, йәғни бер психик тороштан икенсе психик торошҡа күсеү кешенең сәләмәт булыуын күрһәтә.



Ә бына бер-береһенән айырылмаған игеҙәктәрҙе психологик күҙлектән бер бөтөн кеше тип ҡараһаҡ, уларҙың беренсеһен - уның аңы, икенсеһен аңтөбө тип ҡарарға була. Шуға уларҙың береһендә экстраверттарға хас сифаттар өҫтөнлөк итһә, икенсеһендә - интроверттарға хас сифаттар. Шулай уҡ береһен дә тулы ҡанлы экстроверт йәки интроверт тип атап булмайҙыр.

Экстравертҡа оҡшағаны, ғәҙәттә, алдан барыусыға әүерелә, рус телендә әйткәндә - "направляющий". Ул әүҙемлеге һәм ҡыйыулығы менән айырылып тора, бигерәк тә аралашырға ярата. Иғтибарҙың үҙәгендә булыу уға оҡшай. Ниндәйҙер проблеманы хәл иткәндә, ул алдан йөрөй, йәғни уның өсөн лидерлыҡ сифаттары хас. Хәбәрҙе йыш ҡына уйламайынса һөйләй. Шуға күп ваҡыт икеһе өсөн дә ҡарарҙы үҙе генә ҡабул итергә, игеҙәгенән һорап та тормаҫҡа мөмкин. Артабан мәҡәләмдә был экстраверт тибындағыһын беренсе ролде башҡарыусы игеҙәк тип атаясаҡмын.

Интроверт ролен үтәүсеһе, икенсе ролде башҡарыусы була инде, киреһенсә, эйәреп йөрөүсегә әүерелә, йәғни баяғы тел менән "замыкающий" тип атайыҡ. Артыҡ һөйләшеп бармай, күберәк уйҙарға бирелергә ярата, шуға аралашҡан кешеләре күп булмай. Хис-тойғоларын күрһәтмәҫкә, уйлап һөйләргә тырыша. Игеҙәгенең ҡабул иткән ҡарарҙарына йыш ҡына бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ риза була, хатта уның буйһоноусыһына әйләнеп тә китергә мөмкин. Ниндәйҙер идея менән янып бармай, ә күберәк икенсе яртыһы ҡушҡанды эшләй.

...Әйткәндәй, бөгөнгө көндә игеҙәктәр тураһында байтаҡ ҡына художестволы фильмдар бар. Уларҙы ижад иткән режиссерҙарҙың бөтәһе лә игеҙәктәр образы өҫтөндә эшләгәндә, мин атап үткән айырмалыҡтарҙы сюжеттың төп конфликты итеп алып, киноларын бик ҡыҙыҡлы һәм мажаралы итеп төшөргәндәр. Мәҫәлән, Һиндостанда төшөрөлгән "Зита һәм Гита" фильмында был бигерәк тә асыҡ сағыла...

Шулай итеп, игеҙәктәрҙең береһе - аң, икенсеһе аңтөбө ролен ҡабул итә. Ғәҙәттә, көндәлек проблемаларҙы хәл иткәндә алдан барыусыһының ҡарашы һәм ҡарары өҫтөнлөк итә. Ул хәл итә алмаған осраҡта инде икенсеһенең сифаттары ярҙамға килә. Бына шулай: ниндәйҙер шарттарҙа береһе алдан бара, ниндәйҙер икенсе шарттарҙа икенсеһе өҫкә ҡалҡып сыға. Йәғни береһен береһе тулыландыралар.

Ә бына улар үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫһа, йәғни икеһе ике яҡта йәшәй башлаһа, ҡайһы бер проблемалар башланырға мөмкин. Сөнки физик яҡтан айырым кеше булһалар ҙа, психологик яҡтан һәр береһе ярты кеше булып ҡала. Шуға ниндәйҙер көтөлмәгән ситуацияларға эләкһәләр, игеҙәктәрҙең икеһе лә хәл итеү юлын таба алмай, юғалып ҡалыуҙары ихтимал. Ни өсөн тигәндә, тиҙ генә ярҙамға килергә эргәләрендә уларҙың ярты яғы юҡ. Ә үҙҙәренең тәбиғи аңтөбө ундай кәрәкле сифаттарға эйә түгел, сөнки ул ролде игеҙәге башҡарғанға күрә, ныҡлап формалашып бөтмәй. Ғөмүмән, уларҙа бер психик тороштан икенсе психик торошҡа күсеү механизмы тулы кимәлдә үҫешмәй ҡала. Ә был күренештең ниндәй проблемаларға килтереүен киләһе бүлектә һөйләргә уйлайым...

### Игеҙәктәрҙе көткән типик проблемалар...

...Береһенә мәктәпте тамамлау менән орлоҡ һалына. Ғәҙәттә, бөтә ата-әсәләр ҙә тиерлек балаларын бер уҡыу йортона бирергә тырыша. Йәғни икеһенә лә бер төрлө һөнәр һайлайҙар. Әлбиттә, улар балаларының бергә уҡыуҙарын теләй, сөнки 5-6 йыл бер-береһен ҡарап йөрөйәсәктәр бит. Тик артабанғы тормоштары ҡыуандырмаҫҡа мөмкин шул. Ни өсөн тигәндә, уҡып бөтөп, үҙаллы эш башлағас, йыш ҡына игеҙәктәрҙең береһе һайлаған һөнәре буйынса эшләүҙән баш тарта һәм икенсе эш эҙләй башлай. Әлбиттә, бөтәһе лә түгел, әммә күпселегә тип ышаныслы әйтә алам. Эшләп йөрөгәндәренең дә береһе барыбер һөнәренән ҡәнәғәт булмаҫҡа мөмкин. Бындай күренештәрҙең сәбәбе нимәлә һуң?

Мин үрҙәге бүлектә игеҙәктәр физик яҡтан бер-береһенә оҡшаһалар ҙа, психологик күҙлектән ҡарағанда, улар бөтөнләй бер-береһенә оҡшамаған кешеләр, тип әйтеп үткәйнем. Береһендә - бер, икенсеһендә икенсе сифаттар өҫтөнлөк иткәс, уларҙың һәләттәре лә бер төрлө түгел. Береһе - бер эште, икенсеһе икенсе эштәрҙе эшләргә ярата. Шуға икеһе лә бер үк профессияны бер нисек тә һайлай алмай. Икеһенә ике төрлө һөнәр талап ителә. Ә беҙҙең ата-әсәләр, балалары тышҡы яҡтан бер-береһенә оҡшағас, эске тороштары ла шулайҙыр, тип уйлап яңылыша...

Икенсе ҙур проблема күп ваҡыт ғаилә ҡорған ваҡытта башлана. Был бигерәк тә ҡыҙ затынан булған игеҙәктәргә ҡағыла. Йыш ҡына береһенең ғаиләһе тарҡала йәки башҡа төрлө ниндәйҙер күңелһеҙ ваҡиғаларға юлығырға мөмкиндәр. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең ир-егеттәр, ғаиләлә ир кеше баш булырға тейеш, тигән мораль менән тәрбиәләнә. Һөҙөмтәлә уларҙың береһе лә, халыҡ телендә әйткәндә, "подкаблучник" булғыһы килмәй. Шуға кәләш алыу менән ул моралде тормошҡа ашыра башлайҙар. Игеҙәк ҡыҙҙарҙың икенсе ролде башҡарыусыһына ундай егеттәр менән йәшәп китеүе ҡыйын булмаясаҡ. Сөнки ул былай ҙа ғүмер буйы шул ролде үтәне һәм артабан да үтәйәсәк. Ә бына беренсе ролде башҡарыусы игеҙәк ҡыҙға ундай егеттәр менән йәшәп китеүе ҡыйынға тура килә - һәр ваҡыт алдан йөрөп өйрәнгәнгә, уның да ғаиләлә баш булғыһы килә бит. Артабан, "Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай" тигән әйтемгә ярашлы, улар араһында конфликт башланасаҡ. Егет кеше беренселекте бирмәйәсәк - үрҙә әйтеүемсә, ул шулай тәрбиәләнгән. Ә игеҙәк ҡыҙ икенсе ролгә күсә алмай, дөрөҫөрәге, күсә белмәй, сөнки ул ролде ошоға тиклем икенсе игеҙәге үтәне. Бына шуға улар араһында тартҡылаш көсәйгәндән-көсәйә барып, йыш ҡына ғаиләнең тарҡалыуы менән тамамлана...

Әгәр игеҙәк ҡыҙҙар игеҙәк егеттәргә тормошҡа сыҡһа, йәғни беренсе ролде үтәүсе

✓ *Балағыҙҙың дуҫтары ниндәй булыуын белегеҙ. Өс йәше тулғандан һуң сабый тормошонда дуҫлыҡ иң мөһим ролдәрҙең береһен уйнай башлай. Ул донъяны дуҫтары менән бергә уйнау аша танып белә.*



игеҙәк ҡыҙ - икенсе ролде үтәүсе, ә икенсе ролде үтәүсе ҡыҙ беренсе ролде үтәүсе егеткә кейәүгә сыҡһа, ике ғаилә лә матур йәшәп китергә мөмкиндер. Тик тормошта улай килеп сыҡмай шул...

Ата-әсәләрҙең игеҙәктәрҙе бер төрлө итеп кейендереүҙәре лә киләсәктә етди проблемаларға килтереүе мөмкин. Әлбиттә, уларҙы шулай йөрөтөү еңелерәктер, сөнки быныһына нимә алайым, тегенеһе нимә оҡшатыр икән, тип аптырамайһың. Икенсе сәбәбен беренсе бүлектә әйтеп үткәйнем: бер-береһенән көнләшмәһендәр тип, игеҙәктәрҙе бер төрлө кейендерергә, имеш, психологтар кәңәш бирә. Ысынлап та, көнләшеү игеҙәктәр өсөн хас күренеш. Шуға психологтар уларҙың бөгөнгө көнөн уйлап, шулай тиҙәрҙер. Ә бит киләсәктә бөтәһе лә киреһенсә булырға мөмкин. Сөнки ғаилә ҡороп, айырым йәшәй башлағас, уларҙың тормошо бер төрлө булмаясаҡ. Әйтәйек, кемеһелер ярлыраҡ, кемеһелер байыраҡ булыр; береһе бер бүлмәле фатирҙа, икенсеһе ике йәки өс ҡатлы йортта йәшәр... Бына шул ваҡытта һәр нәмәләре бер төрлөгә өйрәнгән игеҙәктәр араһында ысын мәғәнәһендә көнләшеү тойғоһо тоҡанырға һәм бер-береһенә ҡаршы аҫтыртын көрәш башларға мөмкиндәр. Һәм күп ваҡыт шулай эшләйҙәр ҙә...

Әгәр ата-әсәләр киләсәктә балаларының һәр береһенә бер төрлө тормош иптәше, бер төрлө балалар, бер төрлө йәшәү шарттары (һ.б.) гарантиялай алалар икән, әйҙә, бала саҡта бер төрлө кейендерһендәр, шулай уҡ бер төрлө һөнәргә өйрәтһендәр... Әгәр инде килеп сыҡмаһа, ә улай килеп сыҡмаҫы һәр кемгә билдәле, тәрбиәгә булған ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Ә тәрбиә тураһында һүҙем киләһе бүлектә булыр...

### Игеҙәктәргә тәрбиә биреү нигеҙҙәре...

Минең мәҡәләне иғтибар менән уҡып сыҡҡан кеше, игеҙәктәрҙең һәр береһен айырым шәхес итеп тәрбиәләргә кәрәк, тип әйтергә теләгәнемде аңлағандыр. Әлбиттә, бер ғаиләлә тыуып, бер әсәнең күкрәк һөтө менән туҡланып, бергә йәшәй башлаған игеҙәктәрҙе, һәр береһенә айырым тәрбиә бирәм тип, бөтөнләй бер-береһенән айырып булмайҙыр. Улар барыбер бергә уйнап, бергә урамда йөрөп, бергә мәктәпкә барасаҡтар. Үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫҡанға тиклем шулай буласаҡ.

Нисек кенә булмаһын, игеҙәктәргә тәрбиә биргәндә ата-әсәләр, шулай уҡ тәрбиәселәр һәм класс етәкселәре ике әйберҙе иҫтә тоторға тейеш. Беренсеһе. Игеҙәктәр бала саҡта бергә булһалар ҙа, киләсәктә һәр береһе айырым йәшәйәсәк. Күп ваҡыт уларҙың үҙҙәренә генә тормош ауырлыҡтарына ҡаршы торорға, килеп тыуған проблемаларҙы хәл итергә тура килер. Шуға тәрбиәнең төп маҡсаты булып уларҙың һәр береһен киләсәктә үҙаллы йәшәй алырлыҡ шәхес итеп тәрбиәләү булырға тейеш.

Икенсеһе. Тәрбиә барышында шуны күҙ уңынан ысҡындырмаһындар: игеҙәктәр бер-береһенә шул тиклем оҡшаған булһалар ҙа, эске тороштары: фекерләүҙәре, һәләттәре, психологик сифаттары менән бер ваҡытта ла тап килмәйәсәктәр, хатта ҡапма-ҡаршы булырға мөмкиндәр. Шуға тәрбиә һәм белем биргәндә, бигерәк тә уларҙың һәләттәрен асыу өсөн, һәр береһенә индивидуаль алым талап ителә. Әгәр икеһенә лә бер үк шарттар тыуҙырып, бер үк алымдар ҡулланһаң, береһенең тәбиғи һәләттәре асылмай ҡалырға мөмкин. Ә был киләсәктә профессия һайлағанда ауырлыҡтар тыуҙырасаҡ.

Тәрбиә биреү алымдарына килгәндә инде, улар күп яҡлы һәм төрлө булырға мөмкин. Мин дә ҡайһы бер тәҡдимдәремде әйтеп китергә уйлайым. Әлбиттә, бөртөкләп бөтәһен дә һөйләп бөтөп булмайҙыр, ә игеҙәктәргә тәрбиә биреүҙең төп нигеҙҙәренә генә туҡталам.

Ғаиләлә тәрбиә нисек булырға тейеш һуң? Беренсеһе, игеҙәктәр бәләкәйҙән үк һәр береһе үҙен айырым шәхес икәнен тойоп үҫергә тейеш. Бының өсөн һәр береһенә айырым бүлмә булдырырға кәрәк; шулай уҡ айырым эш өҫтәле, кейем шкафы, йоҡлау өсөн койка һ.б. Икенсеһе, өй эштәрендә ярҙам иткәндә, гел бер үк эштәрҙе башҡармаһындар, ә алмашынып торһондар. Был һәр береһен бер бөтөн кеше итеп формалашырға ярҙам итә. Өсөнсөһө, икеһен дә үҙаллы ҡарар ҡабул итергә өйрәтергә кәрәк. Бының өсөн, әйтәйек, магазиндан уйынсыҡ йәки кейем алғанда һәр береһенә үҙенә оҡшағанын һайлап алырға ирек бирелһен. Шулай уҡ был алым игеҙәктәрҙәге көнләшеү тойғоһон бөтөрөү өсөн иң яҡшыһылыр. Сөнки үҙҙәре теләгәнен һайлайҙар бит. Әлбиттә, һанап киткәндәргә ирешеү тиҙ генә булмаҫ, һаман да шул йүнәлештәрҙә тәрбиә биреүҙе ашыҡмай ғына дауам итһәң, үҙ һөҙөмтәһен бирәсәк.

Тәрбиә һәм белем биреү усаҡтарында нисегерәк булырға тейеш? Балалар баҡсаһына йөрөткәндә - икеһен ике төркөмгә, артабан мәктәпкә уҡырға биргәндә, икеһен ике класҡа ултыртыу ҡуйған маҡсаттарға ирешеү өсөн бик яҡшы алым. Бындай осраҡта тәрбиәселәр һәм уҡытыусылар улар менән һөҙөмтәлерәк эшләйәсәк. Әгәр инде бер класта уҡыһалар, икеһе ике парта артында ултырһындар. Әлбиттә, был мәктәпкә ҡағылышлылары мәктәп администрацияһы һәм класс етәкселәре менән кәңәшләшеп башҡарылырға тейеш.

Өҫтәлмә белем биреү үҙәктәренә, йәғни түңәрәктәргә йөрөү тураһында. Әгәр игеҙәктәрҙең икеһе лә бер түңәрәктә шөғөлләнә икән, уның береһе өсөн бер ниндәй файҙаһы юҡ, тип ышаныслы әйтә алам. Сөнки үрҙәге бүлектәрҙә, игеҙәктәр эске тороштары менән ҡапма-ҡаршы кешеләр, тип әйтеп үткәйнем инде. Шуға уларҙы һәләттәренә ярашлы түңәрәктәргә йөрөтөргә кәрәк. Әгәр ата-әсәләр балаларының һәләттәрен белә алмай икән, психологтар менән кәңәшләшһендәр.

Шулай уҡ һәр ата-әсә минең әйткәндәрем һәм башҡа педагогтарҙың кәңәштәре нигеҙендә үҙҙәренең методикаларын һәм алымдарын уйлап сығара ала. Иң мөһиме: игеҙәктәрҙең һәр береһе бер бөтөн шәхес булып формалашып, ышаныслы рәүештә оло тормошҡа аяҡ баҫһын.

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы**
**Иҫәнғол ауылы.**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# БАЛАМ ӨСӨН ЙӘЛ ТҮГЕЛ.

## Бындай ҡараш дөрөҫмө?

**"Балам өсөн бер нәмә лә йәл түгел, барыһын да уның өсөн эшләйем", тип йәшәүсе ата-әсәләр позицияһы дөрөҫмө? Ғаиләлә баланы үҙәккә ҡуйыу, уны өйҙөң бәләкәй бойороусыһына әйләндереүҙең эҙемтәләре ниндәй булыр? Һорауҙар күп. "Нисек грамоталы ата-әсә булырға" тигән мәҡәләһендә Навзат Тархан түбәндәге төп кәңәштәргә туҡталып китә:**



● Тәү сиратта баланы танып белегеҙ. Баланың һәр йәшенә хас психосоциаль үҙенсәлектәр бар. Ошо үҙенсәлекле осорҙарҙы белеү кәрәк, шул саҡта һеҙ баланың рухи һәм физик талаптарына яраҡлы эш итергә өйрәнәсәкһегеҙ. Йәғни һеҙ балаға кәрәкмәгән әйберҙәр менән уның башын ҡаңғыртмаясаҡһығыҙ, кәрәкмәгән һорауҙар бирмәйәсәкһегеҙ.

Балаға шәхес булырға мөмкинлек бирегеҙ. Бала - беҙҙең сабыйыбыҙ, әммә ул беҙ түгел. Ул икенсе, айырым кеше, шунлыҡтан ата-әсә уның айырым шәхес булыуын танырға тейеш.

● Һығылмалы булығыҙ. Сабыйҙарҙың ғәҙәттәре төрлө. Күп кенә осраҡта: "Мин атайым эшләгәнде үк эшләйем, бер ҡасан да бының насарлығын тойғаным юҡ", - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Әммә ғаиләлә биш бала булған осраҡта ла, уларҙың һәр береһенең үҙ үҙенсәлектәре бар.

Иғтибарлап тыңлай белегеҙ. Баланың һүҙен аҙағына тиклем тыңлап бөтөргә, һөйләшкән ваҡытта күҙҙәренә ҡарап торорға, ризалыҡ белдереп, башығыҙҙы һелкеп хупларға, һүҙ араһында һорауҙар бирергә лә кәрәк.

Диалог алып барығыҙ. Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйлау өсөн шәхесте баҫыу йә абруйыңды эшкә ҡушыуға ҡарағанда диалогтың әһәмиәте ҙурыраҡ булыуын аңларға кәрәк.

● Ғаилә эсендә йыйылыштар ойоштороғоҙ. Бергәләшеп ваҡыт уҙғарыу бик кәрәк. Ул ғаилә ағзаларын яҡынайта, сөнки улар бер-береһенең шатлыҡ-ҡайғылары тураһында ишетә. Был ғаилә йыйылыштарының нисә тапҡыр үткәрелеүе мөһим түгел, уларҙың ғаилә ағзаларына файҙалы булыуы кәрәк.

Балағыҙҙың дуҫтары ниндәй булыуын белегеҙ. Өс йәше тулғандан һуң сабый тормошонда дуҫлыҡ иң мөһим ролдәрҙең береһен уйнай башлай. Ул донъяны дуҫтары менән бергә уйнау аша танып белә. Баланың дуҫтарын тәнҡитләргә ярамай, ә өйөгөҙгә саҡырып, улар менән яҡынданыраҡ танышырға кәрәк. Дуҫтарын кәмһетеп ҡарау баланы һеҙҙән ситләштереп ҡуйыуы бар, ул осраҡта сабыйығыҙ барлыҡ эштәрен дә һеҙҙән йәшерә башлауы мөмкин.

● Ғаилә йылыһын бүлегеҙ. Бала өсөн көтөлмәгән ваҡытта йылмайыу уның күңелендә ышаныс һәм эҫенеү тойғоһо уятасаҡ. Шулай уҡ сабыйығыҙ ныҡ ҡурҡҡан йә булмаһа, тулҡынланған ваҡытта уның ҡулдарын усығыҙға алығыҙ. Физик ҡағылыуҙар бала күңелендә ышаныс тойғоһон уята, онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдыра. Мөхәббәт хөкөм иткән өйҙә ата-әсәнең абруйы арта, уларға ҡарата хөрмәт үҫә генә бара. Сабый ата-әсәһенең һөйөүен юғалтмаҫ өсөн генә лә яҡшы эштәр башҡарасаҡ. Мөнәсәбәттәре һөйөү менән һуғарылған ғаиләлә үҫкән бала тормошта күберәк уңыш ҡаҙана.

Балаға көсө еткәндәй генә эштәр йөкмәтегеҙ. Уңыш тәмен тойоп, үҙаллылыҡты белеп, кәрәк тиклем һеҙҙән бойондороҡһоҙ булырға өйрәнһен өсөн балағыҙға уның хәленән килерҙәй өй эштәре ҡушығыҙ, ара-тирә магазинға ебәрегеҙ. "Уның эштәренән миңә ниндәй ярҙам булһын инде", тимәгеҙ.

Иғтибарығыҙҙы проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтегеҙ. Ниндәйҙер проблема килеп тыуа ҡалһа, юғалып ҡалыу һәм тулҡынланыу, беренсе ҡыйынлыҡ ваҡытында ҡойолоп төшөү урынына уны тыныс ҡына сисергә тырышырға кәрәк булыуын балаға яҡшылап аңлатырға кәрәк. Оло кешенең тормош һабаҡтары - бала өсөн хазина. Әммә бойороу тактикаһы урынына кәңәшсе позицияһында туҡталығыҙ.

● Һеҙ бала өсөн өлгө булыуығыҙ тураһында онотмағыҙ. Бала һеҙгә ҡарап, баһа биреп: "Минең дә ата-әсәйем кеүек булғым килә", - тиеү ихтималы нисек? Уның өсөн өлгө булараҡ үҙегеҙҙе ни тиклем дөрөҫ тотаһығыҙ? Бала һеҙҙән өйрәнгәндә һөйләгән һүҙҙәрегеҙгә түгел, ә ҡылыҡтарығыҙға нығыраҡ иғтибар итеүен онотмағыҙ.

Хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшегеҙ. Ҡайғылы йә шатлыҡлы хәл-ваҡиғалар тураһында әңгәмәләшеү балала ғаиләгә эҫенеү тойғоһон уята. Ошо рәүешле ул ғаиләләге тәртиптәрҙе, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҙләштерә. Уға аҡыл өйрәтеү файҙа килтермәйәсәк. Бала менән аралашҡанда үҙегеҙ генә һөйләмәгеҙ, диалог кәрәк.

● Баланың ым-хәрәкәттәренә иғтибар итегеҙ. Балалар үҙ проблемаларын һүҙҙәр ярҙамында аңлата алмай. Ҡыҙыулыҡ, артыҡ теремеклек, ыҙғыш-талаш ойоштороу, алдыҡ, ашарға теләмәү, йоҡоһоҙлоҡ, ҡурҡаҡлыҡ, көнләшеү, мәктәптәге уңышһыҙлыҡтар, тотлоғоу, ҡаршы затҡа ҡарата хас булмаған ҡыҙыҡһыныу - былар барыһы ла проблемалар барлығы хаҡында һөйләй. Баланың был йәшерен депрессия сәбәптәрен һөйләп бирә белмәүен өлкәндәр дөрөҫ аңларға тейеш, бәлки, дауа кәрәк булыр.

● Дәртләндереүҙә лә, шелтәләүҙә лә алтын урталыҡты һайлағыҙ. Өй - ҡағиҙәләр территорияһы булырға тейеш. Мәҫәлән, хатта футбол уйнағанда ла ҡағиҙәләрҙе үтәмәгән уйынсыға штраф һалына. Әгәр ҙә бала тыңлаусан, эшсән, аҡыллы икән, уның тырышлыҡтары һәм эштәре дәртләндереүгә лайыҡ. Тик был осраҡта баланың шәхесен түгел, ә эштәрен маҡтарға кәрәк. Ҡылған эштәре өсөн үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға һәм йәмғиәт ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәнеүе баланың алдына ҡуйылған талаптарҙы һәм сиктәрҙе аңлауы менән туранан-тура бәйле. Бала ҡылған ҡылыҡтарына ярашлы яуап бирергә һәм шелтә алырға тейеш.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҠУШАҒАҢ МЕНӘН ҠУША ҠАРТАЙ!

**Бәлә-ҡазаға, уңышһыҙлыҡҡа юлыҡҡан берәү хаҡында бәгзеләрҙең "Заманында уның ата-әсәһе тегеләй-былай булды. Ана шуларҙың гонаһы балаларына төшкән", тигән һымағыраҡ фаразлауҙарын ишетергә тура килә. Үкенескә, күптәр хатта быға ышанып та ҡуя һәм "Нишләп Аллаһ Тәғәлә һис бер ғәйебе булмаған балаларына ата-әсәһенең ҡөһөрөн төшөрә икән?" тип һығымта яһай һалып та ҡуя.**



Былдай хәлдәр тураһында иркенләп фекерләүҙәргә түгел, тик динебеҙ ҡанундарына ғына нигеҙләнеп һүҙ йөрө-төү кәрәк. Изге Ҡөрьән-Кәримдә ("Фатир" сүрәһе, 18-се аят): "...Бер кем дә икенсе кешенең гонаһын күтәрмәҫ, ауырлыҡ төшкән кеше уны күтәреүен һораһа ла, хатта яҡын туғаны булһа ла..."- тиелә. Ошо аяттан күренеүенсә, һәр кем үҙ гонаһы өсөн фәҡәт үҙе генә яуаплы. Кеше нисек кенә фаразламаһын, ата-әсәнең гонаһы балаһына, башҡа туғанына, ейән-ейәнсәрҙәренә төшә тип һанау Ислам дине ҡанунына тап килмәй! Балаларҙың сирләп, хатта үлеп китеүе һәм бүтән ваҡиғалар - улар тик Аллаһ Тәғәләнең тәҡдире, йәғни һис бер башҡа нәмә менән бәйләнеше булмаған айырым хәл, тип ҡарау кәрәк. Үкенескә, халҡыбыҙ ана шундай һәр төрлө шик-шөбһәләргә, ырымдарға ышаныусан. Быны Аллаһ илсеһе с.ғ.с. ҡәтғи тыйған. Әҙәм балаһына ниғмәт йә яза был донъяламы, әллә ахирәттә биреләме - ул Аллаһ Тәғәләнең генә эше, шуға күрә лә кемдеңдер бәлә-ҡазаһында ниндәйҙер туғанын ғәйепләргә ашыҡмайыҡ.

Ә бына ата-әсәнең балалары өсөн ҡылған доғаһы хаҡында фекер йөрөтөп алыу кәрәк тип һанайым. Ниндәйҙер эш боҙғаны өсөн, "короп ҡалғыры" йә "башың серегер", йә булмаһа, "ҡулың ҡороғор" тип, бәгзе әсәләр үҙ балаларын әрләгәнен бала сағымда ишеткеләй торғайным. Ошо хаҡта ҡайтып, әсәйемә һөйләһәм, ул: "Балаларҙы бер ваҡытта ла ҡарғарға ярамай, әсәй кешенең ҡарғышы төшөүсән ул", - тигәне хәтеремдә. Үҙе һәр намаҙҙан һуң Раббыбыҙға мөрәжәғәт итеп, беҙҙең өсөн баҡый иман, һаулыҡ, бәхет һорап үтенер ине. Артабан: "Бала-сағаларымдың, ейән-ейәнсәрҙәремдең ҡайғы-хәсрәттәрен күрһәтмә, уларҙың тик шатлыҡтарын күреп йәшәргә насип ҡыл, үҙемде балаларымдың артына ҡалдырма (йәнәһе, балаларымдан алдараҡ үлергә насип ит)..." - тип, оҙаҡ ҡына теҙеп алып китер булды. Ғаиләлә биш бала үҫтек. Барыбыҙ ҙа "башлы-күҙле" булғас, һәммәбеҙ өсөн тағы: "Йә Аллаһ, балаларымдың ҡушаҡтары менән ҡуша ҡартайыуын насип ҡыл", - тип тә ялбара торғайны ул. Бөгөнгө көн, үҙем инде олпат йәшкә еткәс, балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем, туғандарым, яҡындарым һәм милләттәштәрем хаҡында йышыраҡ уйланып, шул уҡ ваҡытта дин юлында булған атайым һәм әсәйемде көн дә иҫкә төшөрәп алам.

Беҙ, хәҙерге ваҡытта хаҡлы ялдағы оло быуын кешеләре, үҙебеҙҙе "совет балалары", тип тә атап өйрәнгәнбеҙ. Беҙҙең заманда һәр кимәлдәге уҡытыусыларыбыҙ дин тотҡан инәйҙәр, олатайҙар хаҡында, йәғни, "иҫке замандың уҡыуы" бер аҙ тейгән боронғо кешеләр тураһында "Юҡ нәмә менән булышып йөрөгән наҙан, замандан артта ҡалған быуын" тигән һүҙҙәрҙе ҡаныбыҙға һеңдерҙе. Пионер, комсомол кеүек бөтөнләйгә динде инҡар иткән ойошмалар беҙҙең тәрбиселәребеҙ булды. Һәммәләребеҙ ҙә шуның аша үттек. Динебеҙҙе хатта әҙәм балаһының аңын томалаусы опиумға тинләштереүҙән дә тартынманылар. Шуға ҡарамаҫтан, йөрәктәрендә иман йөрөткән туғандарыбыҙ, яҡташтарыбыҙ һәр саҡ беҙҙең арала йәшәне. Ул быуынды ифрат та ябай ғына итеп "ата-олатайҙарыбыҙ" тип атап та ғәҙәтләнгәнбеҙ һәм шул дәүерҙә йәшәгән яҡындарыбыҙҙы һәр саҡ динле, иманлы кешеләр итеп күҙ алдына килтерәбеҙ. Ҡайҙалыр эшкә, уҡыуға, йә әрме сафына оҙатҡандамы, йә булмаһа, берәй ауырлыҡ килгәндә, сирләп киткән мәлдәребеҙҙә улар бер Аллаһ Тәғәләгә беҙҙең өсөн доға ҡылырҙар ине...

Ваҡыт тик бер урында ғына тормай шул. Һанаулы ғына йылдар үтеү менән әҙәм балалары ҡартая, әжәлдәре етеп, ахирәткә лә китеп бара. Был - фани донъя тормошо өсөн нормаль күренеш. Беҙҙә изге доғаларынан һис бер ваҡытта ташламаған олатайҙарыбыҙ, өләсәйҙәребеҙ әллә ҡасан уҡ гүр әйәләре булды инде. Үҙебеҙ хәҙер оло ғына йәштәргә еттек тиерлек, артыбыҙҙа балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙ үҫеп еткәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Тик бына ошо мәлдәрҙә генә шул ғәзиздәребеҙ өсөн Раббыбыҙға ялбарыуҙың ни тиклем ныҡ кәрәклеге хаҡында уйлана башлайбыҙ, доға ҡыла белгән яҡындарыбыҙҙың был донъяла юҡлығын тоябыҙ. Сөнки, күптәребеҙ инде сал сәсле олатай һәм өләсәйҙәр булып китеүебеҙгә ҡарамаҫтан, Аллаһ Тәғәләгә нисек мөрәжәғәт итеүҙе белеп еткермәй. Ошо ғибәҙәт төрөн өйрәнеүҙе ниндәйҙер айырым кешенең эше тип һанап, йылына бер мәртәбә өйгә мулла саҡырып, доға ҡылдырып алыу менән генә сикләнә күпселек.

Һүҙ юҡ, хәҙрәттәр, имамдар - һәр төрлө ғибәҙәт тәртибен яҡшы белгән, махсус белемле кешеләр. Әммә бүтәндәр өсөн Аллаһ Тәғәләгә ялбарыу уларҙың төп бурысына инмәй. Уларҙың төп тәғәйенләнеше - башҡаларҙы тура юлға өндәү, хаҡ дингә өйрәтеү. Ә беҙҙең эш - уларҙан өйрәнеү. Ни өсөн бына ошо мәсьәләгә яҡташтарымдың иғтибарын йүнәлтергә тырышам әле? Сөнки балалары өсөн Раббыбыҙға ата-әсәләрҙең шәхсән үҙҙәре ялбарыуына бер ни ҙә етмәй! Баштараҡ, үҙемдең әсәйем мәрхүмә доғаһы хаҡында бер аҙ әйтә биргәйнем бит әле. Әлхәмдүлилләһ, ғаиләбеҙҙә үҫкән бишебеҙ ҙә бөгөнгө көндә әлегә иҫәнбеҙ. Оло ағайыма 82, ә иң кесе ҡустыбыҙға - 64 йәш. Иң мөһиме: барыбыҙ ҙа йәштән ҡауышҡан "ҡушаҡтарыбыҙ менән ҡуша ҡартайып" киләбеҙ (Аллаһ бәрәкәт бирһен!).

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с өс кешенең ҡылған доғаһы айырыуса ҡабул булыусанлығы хаҡында әйткән хәҙис бар. Береһе - мосафир (үҙенең тыуған еренән ситтә, сәфәрҙә булған кеше), икенсеһе - кемдеңдер тарафынан нахаҡҡа рәнйетелгән кеше, өсөнсөһө - ата-әсә. Танышмы ул, түгелме, әммә, борон-борондан беҙҙең ата-бабаларыбыҙ сәфәрҙә булған кешегә һәр саҡ ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән. Шулай уҡ башҡаларҙы нахаҡҡа рәнйетеүҙең ниндәй хәүефле икәнен дә белгәндәр, рәнйегән кешенең бәддоғаһынан ҡурҡҡандар... Ата-әсә ихлас ҡылған доға һис шикһеҙ ҡабул буласағы хаҡында ла Бәйғәмбәребеҙҙең һүҙҙәрен яҡшы белгән әүәлге ата-олатайҙарыбыҙ, инәйҙәребеҙ үҙҙәре тереклектә саҡта ана шул изге бурыстарын үтәргә тырышҡандар.

Һүҙ аҙағында. Ата-әсәнең, изге доғаһы ғына түгел, ә бәддоғаһы ла ҡабул булыу ихтималлығы хаҡында онотоу ярамай һәм ошо эштән һаҡланыу тейешле. Берәй эш боҙғаны өсөн үҙҙәренең шаян балаларын ҡыҙҙырған саҡта ата-әсәләр (айырыуса әсә кешеләр) һәр һүҙҙе уйлабыраҡ әйтергә кәрәклеге лә гел генә иҫтәрендә тотһон ине. Был бик етди мәсьәлә. Бәйғәмбәр хәҙисенә таянып, үрҙә әйтелгән бына ошо мәғлүмәттәрҙе һис кенә лә төрлө хөрәфәттәр (йылан ҡарғышы, йә иһә ниндәйҙер ағас ләғнәте, йә булмаһа берәй үлгән кеше рухының зәхмәтәре һымаҡ кешеләр уйлап сығарған юҡ-бар нәмәләр) менән бутарға ярамай. Ҡәҙерле балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең тик изге доғаларыбыҙҙан ташламайыҡ, хөрмәтле ата-әсәләр!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# МЫЖЫУҒА ҠАРШЫ...

## мыжырғамы, әллә түҙергәме?



**Донъяла бәхәсһеҙ булған факттар, һанай китһәң, шаҡтай йыйыла. Шулай ҙа улар араһында тормош көтөр өсөн айырыуса мөһимдәре бар.**

Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙар психологияһының ирҙәрҙекенә ҡарағанда ғәйәт үҙенсәлекле булыуы бәхәсһеҙ. Йәғни ҡатын-ҡыҙҙарҙа хисҙәр, тойғолар айырыуса көслө була, ә ир-егеттәр иһә күберәк уйлап, аҡыл менән эш итә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа хислелек артыҡ көслө, тип әйтеү, әлбиттә, уларҙы бер нисек тә кәмһетмәй. Шулай уҡ ирҙәрҙәге баш, аҡыл менән эш йөрөтөү сифаты ла уларға бер ниндәй өҫтөнлөк бирмәй. Киреһенсә, был шарттарҙа ир-аттарға ҡатын-ҡыҙҙарҙы аңлай белергә кәрәк. Йәғни ир кеше ҡатын-ҡыҙ менән мөғәмәләлә уның шикелле уҡ хискә бирелмәҫкә, сабыр итергә, түҙемле булырға тейеш була.

Ҡатын-ҡыҙҙар алдында күрһәтелергә тейеш булған сабырлыҡтың, уларҙы аңлауҙың бер матур үрнәген беҙ хәлифә Хәҙрәти Ғүмәр миҫалында ла күрәбеҙ. Хәҙрәти Ғүмәр хәлифә булып торған заманда бер ир кеше хәләл ефетенең йыш ҡына хискә бирелеп, уны кәрәкмәгәнгә тиргәүенән тамам туйып, хәлифәгә зарланырға китә. Хәҙрәти Ғүмәрҙең өйөнә барып еткәс, ихтыярһыҙҙан ишек төбөндә туҡтап ҡала: эстән хәлифә ҡатынының моң-зар тулы тауышы ишетелә. Күрһәң, хистәре ташҡан сағы була. Әлеге кеше икеләнеп ҡала. Һәм, ниһәйәт, хәлифәнең өйөнә инеп тормай, ҡайтып китергә ҡарар итә. Нәҡ шул ваҡытта Хәҙрәти Ғүмәр (радиаллаху анху) өйөнән сығып, уны күреп ҡала һәм: "Берәй йомошоң бармы әллә? Нинә китергә йыйынаһың, әйҙә, һөйлә хәлдәреңде", - ти. Теге кеше, бер аҙ икеләнеп торғандан һуң, былай тип һөйләй: "Ҡатынымдың көйһөҙлөгөнә зарланырға тип килгән инем. Ҡараһам, һеҙҙең ҡатынығыҙ ҙа нәҡ минеке кеүек икән. Әммә һеҙ уға ҡаты өндәшмәйһегеҙ, сабырлыҡ менән тыңлайһығыҙ икән. Быны күргәс, мин дә һеҙҙең кеүек үк сабыр итергә ҡарар ҡылдым". Хәлифә иһә былай ти: "Ҡатынымдың хистойғоға бирелгән саҡтарында аңлы рәүештә сабыр итәм, сөнки ул минә күп яҡшылыҡтар ҡыла. Шулай булғас, ниңә әле мин, уның тәбиғи ғәҙәтенә асыуым килеп, ҡаты яуап бирергә һәм ғаиләләге тыныслыҡты боҙорға тейеш? Ул минең ашарымаәсеремә әҙерләй, керемде йыуа, өйөмдө йыйыштыра, балаларымды ҡарай, мине хәрәм эштәрҙән һаҡлай. Һанай китһәң, тағы әллә күпме яҡшылығы бар. Быны белә тороп, нисек итеп уға асыуланырға мөмкин?"

Ысынлап та, ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ бер-береһенә мохтаж йәндәр, улар бер-береһенән башҡа йәшәй алмай. Шул уҡ ваҡытта тәбиғәттәре лә ике төрлө. Ни өсөн төрлө? Сөнки ҡатын-ҡыҙ бер төрлө, ә ир кеше - икенсе төрлө вазифалар башҡара. Шуға күрә ике яҡ та был айырмалыҡтарҙы белеп, бер-береһен аңларға һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе лә шул аңлашыу нигеҙендә ҡорорға тейеш.

✓ *Әтәскә лә абруйлы Әтәс булыуы еңелдән түгел, улым. Тәү мәлдә йәш Әтәс матур итеп һөрәнләй ҙә алмай әле ул. Күп ваҡыт уның зәғиф тауышы үҙенән әллә ни ары китә алмай, ярты юлда өҙөлөп ҡала.*

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...*

# ӘТӘСКӘ ЛӘ... ЕҢЕЛ ТҮГЕЛ!

Ауылдың йоҡонан уянған ағына мәле. Һикәлтәлә ултырған бала тын ғына урамды күҙәтә. Кисә генә ул олатайөләсәһенә ҡунаҡҡа ҡайтҡайны. Ә бына бөгөн таң менән тороп та ултырған. Нишләп иртә торғандыр инде, белмәйем. Әле бит бик иртә, хатта ауыл өҫтөнә йәйелгән томан да йүнләп таралып өлгөрмәгән. Яңы урында йоҡлай алманы микән был бала? Әллә ҡала тормошонан һуң ауыл тормошо танһыҡ булып китте микән? Бәлки, башҡа берәй сәбәп булғандыр? Кем белһен инде уны хәҙер. Миңә ҡалһа, тубыҡтарын ике ҡулдары менән ҡосаҡлап ултырған бала ауылда ғына була торған тынлыҡ-тыныслыҡтан ниндәйҙер ләззәт, ниндәйҙер көс, ниндәйҙер ял алып ултыра, буғай.

Ошо мәл малайҙы бер аҙ һиҫкәндереп, йәйләп ҡына баҫып, һарайҙан Әтәс килеп сыҡты. Үҙ дәрәжәһенән төшөрмәй генә тирәяҡты байҡап алды. Бер килке башын йә тегеләй, йә былай бороп, тирә-йүндә күҙәтеп торҙо. Был тикшереүҙән ул ҡәнәғәт ҡалды, булһа кәрәк. Ысынлап та, кисә һарай мөйөшөнә һөйәлгән һәнәк-көрәк бөгөн дә үҙ урынында. Кисә ерҙә аунап ятҡан тас бөгөн дә шул рәүешле аунап ята. Түмәргә сабылған балта ла шул килеш түмәр өҫтөндә тора. Ярылған утын өйөмө лә шул килеш ята. Эш бүре түгел, урманға ҡасмаҫ, тигән әйтем дөрөҫ икән. Ҡыҫҡаһы, һәр нәмә үҙ урынында, бөтә ерҙә тәртип. Тикшереүҙән ҡәнәғәт ҡалған Әтәс бер килке ауыҙ эсенән ниндәйҙер йырҙы көйләп торҙо ла ҡанаттарын бер-ике һелкеп кенә картәләүгә осоп менде. Осоп менде лә өҫтән тағы тирә-йүнгә күҙ һалды. Был тикшереүҙән дә ҡәнәғәт ҡалды. Урамда ла именлек, ауылда ла именлек, тип еңел һулап ҡуйҙы ул, буғай. Шунан Әтәс һайғауҙа тегеләй әйләнеп, былай әйләнеп, тегеләй шылып, былай шылып, үҙенә унайлы урын әтмәлләп алды. Әйлы урын тапҡас, бер аҙ эстән генә нимәлер әйтеп алды ла, киң күкрәктәрен тултырып, тын алды. Аҙаҡ башын бер аҙ артҡа ташлап, көүҙәһен мөмкин тиклем алға әйеп, ҡанаттарын бер аҙ йәйә биреп, бар көсөнә һөрәнләп ебәрҙе.

- Ки-кри-күүүүүк!

Һөрәнләп ебәрҙе лә, башын бер яҡҡа бер аҙ ҡайҡайта биреп, тынып ҡалды. Һүҙ ҙә юҡ, һаулыҡ шәп Әтәстең. Тауышы алыҫҡа китте былай. Уның моңло тауышы ауылдың теге осонда ла ишетелгәндер әле. Күп тә үтмәне, яҡындан да, алыҫтан да башҡа әтәстәрҙең тауыштары яңғырай башланы.

- Ки-кри-күүүүүк! Ки-кри-күүүүүк! Ки-кри-күүүүүк!

Былар бер-береһен ошолай сәләмләй икән, тип уйлап ҡуйҙы малай. Беҙҙең Әтәс тағы берҙе ҡысҡырырға самалап, кәүҙәһен аңҡайта биреп торҙо ла, нишләптер кире уйланы. Бөгөнгә етәр, тип әйтте микән эстән генә. Бер аҙ тирә-йүнгә күҙ йүгертеп алғандан һуң һалмаҡ ҡына ергә осоп килеп төштө. Был мәлгә һарайҙан урамға берҙер артлы унлаған тауыҡ йүгереп килеп сыҡҡайны инде. Улары һәр кеме үҙенсә сутырҙап, нимәлер һөйләп алған була бит әле. Һаулыҡ һорашыуҙары, хәләхүәлде белешеүҙәре ошолайыраҡ микән биларҙың, тип уйлап ҡуйҙы малай. Әтәс мәртәбәһен белеп кенә уларҙы тыңланы ла, тауышын бер аҙ күтәрә төшөп, уларға нимәләр һөйләп алды. Аҙаҡ танау эсенән генә ниндәйҙер көйҙө ҡәнәғәт көйләй-көйләй, һарай яғына инеп тә юғалды. Әтәс тауыҡтарға ниндәйҙер эш ҡушты, буғай, тип уйлап ҡуйҙы малай. Бер аҙҙан тауыҡтар ҙа тырым-тыраҡай таралышып бөттө.



Ошо мәл солан ишеген шығырлатып асып, өйҙән олатай килеп сыҡты. Ейәненә күҙ һирпеп алды ла уның менән ике ҡуллап күрешә. Еңелсә генә арҡаһынан ятып алды.

- Һаумы, улым. - Тора биргәс, өҫтәп ҡуйҙы: - Иртә тороуың һәйбәт.

Урамға күҙ һалғандан һуң, усын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, ауыл яғына ҡарап ҡатып ҡалды. Әллә олатай ҙа әтәс һымаҡ ҡысҡырырға самалай инде, тип уйлап ҡуйҙы малай. Әммә уның өмөтө аҡланманы. Олатайы: "Аллаға шөкөр, ауылда именлек", - тип еңел һулап ҡуйҙы. Шунан һикәлтәнән төшөп, урам эсенә байҡау яһаны. Бөгөн малайҙар утынды ярып бөтөп, лапаҫ аҫтына ташып ҡуйырҙар, тип үҙ алдына һөйләнеп алды. Шунан: "Ҡуй инде уларҙы, балтаны урынына ҡуймағандар, һәнәккөрәкте йыйыштырмағандар, бөгөн улар менән бер аҙ тәрбиә эше алып барырға тура килер", - тип әйтеп ҡуйҙы. Аҙаҡ юл ыңғайы урамда тәгәрәп ятҡан тасты һарай мөйөшөнә һөйәп, картәләү яғына инеп юғалды. Атын ҡарарға китте, тип уйлап ҡуйҙы малай.

Күп тә үтмәне, солан ишеге тағы шығырлап асылды. Бер ҡулына күнәк ҡыҫтырып алған өләсәһе икән. Ыңғай ғына төшөп китмәне ул һикәлтәнән. Бер килке һоҡланып ейәненә ҡарап торҙо. Әйтерһең дә, уны тәү тапҡыр күрә. Шунан дөмбөлдәтеп арҡаһынан ятып алды.

- Хәйерле иртә, улым, хәйерле иртә. Өшөмәйһеңме? Нишләп йоҡлай бирмәнең? Ҡалай иртә торғанһың. Аҫтыңа берәй нәмә түшәп ултырһаң ней була. Иртәнсәк такта һыуыҡ була бит ул. Арҡаңа берәй нәмә һалып ултырһаң да шәп булыр ине. Арҡандан һыуыҡ үтеп ҡуймаһын тағы...

Өләсәй был һүҙҙәрҙе һикәлтәнең һәр баҫҡысы һайын әйтә барҙы, буғай. Ергә аяғы тейеү менән: "Ай-әттәгенәһе, һуңлап барам икән дәбаһа, тиҙерәк һыйырҙы һауа һалып, көтөүгә ҡыуыр кәрәк", - тип һөйләнәһөйләнә һарай яғына йүнәлде. Малай өләсәһенең һыйырға өндәшкән йылы һүҙҙәрен, аҙаҡ күнәк төбөнә сөмбөрләп һуғылған һөт тауыштарын бер килке ләззәтләнеп тыңлап ултырҙы. Өләсәһе һыйыр-башмаҡтарҙы көтөүгә ҡыуған мәлдә ауыл йоҡонан тамам уянды, буғай. Кемдер һыйыр һауа, кемдер һыйыр ҡыуа, ҡайҙалыр һарыҡ-кәзә баҡыра, ҡайҙалыр өйрәк-ҡаҙ ҡаңғылдаша. Ара-тирә көтөүсенең сыбыртҡы шартлатыуы ишетелеп ҡала.

Ошо мәл ейәне эргәһенә олатай килеп сүгәләне. Арҡаһынан еңелсә генә ятып алғандан һуң әйтеп ҡуйҙы.

- Әтәс матур һөрәнләне, ибет, улым...

Улар бер аҙға тын ҡалды. Аҙаҡ олатай һүҙен дауам итте.

- Һуңғы ваҡыт тормош апаруҡ буталып китте, улым. Бөгөн бәгзе тауыҡ Әтәс булып ҡыҫҡырырға ла тартынмай.

Һайғау өҫтөндә ҡысҡырып (һөрәнләп, тип яҙып булмай ҙа инде) ултырған тауыҡты күҙ алдына килтереп, малай ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙе. Ейәненең нимәгә көлгәнен аңлаған олатай үҙ алдына һөйләнде.

- Ситтән ҡараһаң, ысынлап та был хәл көлкө шул...

Аҙаҡ ейәненә ҡарап, һүҙен дауам итте.

- Әтәскә лә абруйлы Әтәс булыуы еңелдән түгел, улым. Тәү мәлдә йәш Әтәс матур итеп һөрәнләй ҙә алмай әле ул. Күп ваҡыт уның зәғиф тауышы үҙенән әллә ни ары китә алмай, ярты юлда өҙөлөп ҡала. Ҡайһы берәүҙәре йә башын артҡа үтә ныҡ ташлап, йә һөрәнләгән мәлдә алға үтә ныҡ иңкәйеп, һайғауҙан ҡолап та китә (Быныһын шыттыра, тип уйлап ҡуйҙы малай. Әллә ысын микән. Улайға китһә, олатай оло башы менән алдашып ултырмайҙыр инде). Шулай йәйләп Әтәс матур итеп һөрәнләргә өйрәнеп ала. Әлбиттә, матур итеп һөрәнләү - үҙе бер һөнәр. Әммә матур һөрәнләү менән генә эш бөтмәй бит әле. Эшендә лә матур итеп алып бара белергә кәрәк. Шунда ғына урамда тәртип була.

Олатай менән ейән бер аҙға тын ҡалды. Әлбиттә, бала кеше оло кеше әйткән һүҙҙәрҙең барыһын да аңлап бөтмәне. Насип итһә, ваҡыты еткәс, аңлар әле. Бөгөн бала күңеленә ниндәйҙер тәрбиә орлоғо һалындығына бит әле...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!*

## "ҺӘМ БАШҠАЛАР" АРАҺЫНДА

Яҙыусылар союзында эшләгән саҡ. Йәйҙең оҙон көнөндә бүлмәмә Мостай Кәрим килеп инде. Һаулыҡ һорашты ла:

- Мин һиңә, Әхмәр, бер генә һүҙ әйтергә килдем. Мин һаман да классиктар араһында йөрөйөм ул, - тине.

Башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне ул, хушлашты ла, сығып китте. Оҙаҡ ваҡыт уйланып йөрөнөм: ысынлап та, был һүҙҙәре менән ул миңә нимә әйтергә теләне икән? Һуңынан ғына иҫемә төштө. Ошо хәлдән бер нисә көн алда мин радиоға интервью биргәйнем, шунда барлыҡ күренеклеләр рәтендә ағайҙың исемен әйтергә онотҡанмын икән дә.

Ошоға оҡшаш бер хәл яҙыусыларҙың сираттағы бер съезында булды. Бер яҙыусы докладсының сығышында ниндәй фамилияларҙың нисә тапҡыр телгә алыныуын һанап ултырған. Тик, үкенескә күрә, докладсы уның фамилияһын бер тапҡыр ҙа телгә алмаған. Съезд үткәс, ул докладсыға үҙенең дәғүәһен:

- Минең ике съезд араһында шунсама китабым сыҡты, ике тапҡыр журналдың лауреаты булдым, бер китабым уҡыусылар тарафынан "Йыл китабы" тип баһаланды. Һеҙ үҙ сығышығыҙҙа фәләндең фамилияһын 20, фәләндекен - 15, төгәндекен 10 тапҡыр телгә алдығыҙ, ә мине, исмаһам, исем өсөн булһа ла бер тапҡыр ҙа әйтмәнегеҙ, - тип белдергән.

- Һеҙ минең докладты бик игтибарһыҙ тыңлағанһығыҙ, иптәш, - тип уға яуап биргән докладсы, яҙыусының үҙенә контрһөжүмгә күсеп, - мин һеҙҙең фамилияны барлығы 25 тапҡыр телгә алдым.

- Алдашмағыҙ, миңә ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ яҙған докладҡа тағы бер тапҡыр күҙ йүгертеп сығығыҙ. Мин был мәсьәләне был көйө ҡалдырмайым, кәрәкле урынға ялыу яҙам, - тип оторо ярһыған яҙыусы.

- Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ, - тип докладсы телмәрә яҙылған ҡағыҙҙы күрһәтергә тотонған, - минең докладта барлығы 25 тапҡыр "һәм башҡалар" тип әйтелә. Ана шул "һәм башҡалар" араһындағылар исемлегендә һеҙ беренсе урында тораһығыҙ...

Был мәсьәләнең аҙағы нисек бөткәндер, әммә "һин һәм башҡалар араһында" тигән лаҡабы тороп ҡалды.

## ШАҒИР ҠАТЫНЫ БУЛЫУ...

Бер саҡ шағирҙарҙың ҡатындары йыйылышып, бер-береһенә үҙҙәренең аһ-зарын еткереп ултырған икән. Был йәшерен йыйылышта шағирҙарға ҡатындары тарафынан шундайыраҡ дәғүәләр ҡуйылған:

- Беҙгә шағир ҡатыны булған өсөн "за вредность" түләүҙе юлларға кәрәк, әхирәткәйҙәрем, мәсьәләне Дәүләт Думаһына сығарырға кәрәк, - тигән бер өлкән шағир бисәһе;

- Уларҙан беҙҙең күргәнде дошманыбыҙға күрергә яҙмаһын. "Ите - һиңә, һөйәге - миңә" тигән һымаҡ, беҙ бит уларҙың халыҡ күрмәгән насар яҡтарын ғына күрәбеҙ. Ана, минеке, яңы шиғыр яҙһа, һиңә, тип алдаша, ә үҙенең итенә һөйәркәләре, шиғриәтен яратыусылары хужа. Миңә ҡаҡ һөйәккә ҡалғас ҡына ҡайтып йығыла, - тигән урта йәштәрҙәге шағир бисәһе.

- Минеке лә, ана, "халҡым ҡосағында йәшәйем", тип алдашып яҙа. Кем ҡосағында йәшәгәнен бик яҡшы беләм. Төнгәнән иртәнсәк кенә ҡайтып инде лә, үҙенең төндә йоҡларға ҡайтмағанын нисек аңлата, байғош: "Һуңғы ваҡыт ижад итергә илһам килмәй башланы, шуға күрә һине һағыныр өсөн ҡайтманым", - ти. Үҙен әрләргә иткәйнем, бер һүҙ ҙә әйттермәй үбергә тотонмаһынмы, - тип уларға ҡушылған йәш шағир бисәһе.

- Эй, әхирәткәйҙәрем, нисек кенә булһа ла, түҙәбеҙ инде, яҙмышыбыҙ шулай булғас, ҡайҙа барабыҙ. Әммә шуны ла онотмайыҡ: бар ҡатындар ҙа шағир ҡатыны була алмай, шағир ҡатыны булыу - ул профессия, - тип әхирәттәренең ауыҙын шапылдатып япҡан шағир Рәмил Йәнбәктең һөйөклө ҡатыны Зилә ханым...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХАТАЛАРЫҢ ҺАБАҠ БИРҺЕН

■ Мичиган университеты ғалимы Джэйсон Моузер кешеләр үҙҙәре яһаған хатаны төрлөсә ҡабул итеүен асыҡлаған. Эксперттар раҫлауынса, үҙенең хатаһында нимәгәлер өйрәнәм, тип уйлаусы кешеләрҙең аҡыл ҡеүәһе күпкә үсешкән була, улар яңылышыуҙарҙы һәм хаталарҙы ла еңелерәк ҡабул итә. Тормоштағы һәр осраҡтан ниндәйҙер һабаҡ алырға ынтылыусылар, әгәр ҙә хәл ҡатмарлашып китһә, мин уны мотлаҡ хәл итәсәкмен, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаһа, был проблеманы аңларға тырышасаҡмын, тип уйлай. Ә быны тағы ла аҡыллыраҡ була алыуҙарына ышанмағандар бер ҡасан да үҙҙәренең шәхси тәжрибәһе менән ҡуллана һәм үҙ хатаһында өйрәнә алмаясаҡ.

■ Стресс һеҙәмтәһендә организмдан бүленеп сыҡҡан химик берләшмәләр мейе туҡымалары өсөн зарарлы. Шуға ла стресс тәьҫирендә мейе кибеүе һәм хатта кешенең аҡылына зыян килеүе ихтимал, ти табиптар. Мейе өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыусылар исемлегенә яратмаған кеше менән ғаилә ҡороп йәшәү, йәрәхәт алғандан һуң килеп тыуған ситуациялар, шулай уҡ перспективаһыҙ эш тә инә. Тап улар мейе күҙәнәктәрен үлтереүсе кортикостероидтар барлыҡҡа килтерә. Кортикостероидтар киҫкен хәлдәрҙә иммун системаһын баҫа һәм ҡан әйләнешендә шәкәр концентрацияһын арттыра. Бигерәк тә кортикостероидтарҙың тәьҫиренә мейенең хәтерләүҙәр формалаштырыу менән бәйле өлөшө - гиппокамп тиҙ бирешә.

■ Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡарбуз атеросклероз үҫеше хәүефен кәметә. Ғалимдар сысҡандарҙа һынау үткәреү өсөн уларға юғары холестеринлы аҙыҡ ашатҡан. Шул уҡ ваҡытта бер төркөм сысҡандарға ҡарбуз һуты эсергәндәр, икенселәре ябай һыу эскән. Һигеҙ аҙна үткәндән һуң ғалимдар сысҡандарҙың ауырлығын үлсәгән һәм килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе сағыштырған. Ҡарбуз һуты эскән сысҡандарҙың ауырлығы кәмерәк, уларҙың ҡан плазмаһындағы холестерин күләме лә әҙерәк булған.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре энергетик эсемлектәрҙең хәүефле булыуы тураһында күптән белдергәйне. Беренсенән, был эсемлектәрҙең составында шәкәр күп күләмдә була. Шәкәрҙең тәүлегенә тәҡдим ителгән нормаһы 22 грамм булһа, энергетик эсемлектәрҙә уның күләме 102 грамға етә. Икенсенән, уларҙың составындағы кофеин, таурин, женьшень ҡан баҫымын күтәрә һәм йоҡоһоҙлоҡҡа килтерә. Әммә быны менән генә энергетик эсемлектәрҙең зыяны бөтмәй: уларҙы ҡулланыу тахикардия, тын алыу менән бәйле проблемаларға, эпилептик өйәнәк, аритмия, аллергия, хатта үлемгә килтереүе ихтимал. Мәҫәлән, Францияла энергетик эсемлектең дүрт банкаһы 18 йәшлек спортсыны үлтерә.

■ Кеше ауырыған саҡта бер аҙ ашамай торһа, күпкә файҙалыраҡ, сөнки был ваҡытта организмдың көсө аш һендереүгә түгел, ә инфекция менән көрәшеүгә өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Ауырыған мәлдә туҡлыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емеш-еләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуға бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашарға, һут эсергә кәрәк. Әйткәндәй, киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

ХӘТЕРКИТАП

# АТАЙ ЙЫЛЫҺЫ

**Ғүмерҙе, фанилыҡты тәбиғәттең йылы миҙгелдәре менән күңелемә һеңдерәм, хәтеремә беркетәм. Ә ул йылылыҡтың сығанағы йыл миҙгеленән, көн торошонан бигерәк, иң ҡәҙерле, ғәзиз кешем - атайым ул. Миҙгелде миҙгел ҡыуа, йылдар ҙа үҙ ағышы менән бара, ә минең бер көнөм дә атайымды иҫкә алмай үтмәй. Нимәгә генә тотонһам да, йөрәгемде йылытып, атайым иҫкә төшә: ашҡа тоҙҙо ла ул өйрәткәнсә һалам. Хатта энә тоторға ла инәйем түгел, атайым өйрәтте бит...**



Атайым Мырҙағәрәев Мөнир 1930 йылдың 13 октябрендә хәҙерге Шишмә районы Яңы Ябалаҡлы ауылында указлы мулла Мәмбәтҡол Мырҙағәрәй улы ғаиләһендә яҡты донъяға килә. Ул ваҡытта илебеҙҙә колхоздар ойошторола башлай. Мәмбәтҡол ҡартатайым да, заман талаптарына буйһоноп, атын, келәтен колхозға тапшыра. Яңы Ябалаҡлы Суҡраҡлы ауылы менән ҡуша "Берлек" колхозына ойоша. Ҡартатайым 1937 йылда ошо күмәк хужалыҡтың рәйесе булып китә. Әммә указлы мулла улы булыуын иҫтә тотоп, ҡартатайымды коммунистар партияһы сафына алмайҙар. Колхоз рәйесе булыуына ҡарамаҫтан, уны партия йыйылыштарында ла ҡатнаштырмайҙар. Быҡа шундай ваҡиғаларҙың шаһиты була атайым.

1938 йылда атайым беренсе синыфҡа уҡырға төшә. Ауылыбыҙҙа мәктәп булмағас, бөтә ауыл балалары көҙлө-яҙлы ямғыр, бысраҡтарҙа ла, ҡышҡы һыуыҡтар, буранлдарҙа ла Суҡраҡлы ете йыллыҡ мәктәбенә йөрөп уҡый. Бөйөк Ватан һуғышы арҡаһында илгә төшкән ауырлыҡтар атайымды ла урап үтмәй. 1943 йылда ҡартатайымды хеҙмәт армияһына алалар. Тормош тағы ла ауырлаша: үҫмер, уҡыуын ташлап, үгеҙ башмаҡты егергә өйрәнеп, колхоз эшендә йөрөй, утын хәстәрләй, ер һөрә, Шөңгәк-Күл элеваторына иген ташырға ла тура килгеләй.

- Ул ваҡытта үҫмерҙәрҙең барыһы ла ҡатнашты инде колхоздың төрлө эштәрендә, - тип хәтерләй торғайны атайыбыҙ. Еңеү хәбәрен дә ауылға ул беренсе булып алып ҡайта. Ундай ваҡиғаны онотторлоҡмо һуң! - Ул көндә мин Дурас ауылында инем. Телефон аша булһа кәрәк, һуғыш бөтөү тураһында хәбәр алына. Ҡыуаныслы хәбәрҙе ишетеп, ауыл советы эргәһендә мәктәп балалары, уҡытыусылар, ауыл халҡы йыйылды - митинг башланды. Митингтан һуң үҙебеҙҙең ауылға ҡайтып, шатлыҡлы хәбәрҙе ауылдаштарыма еткерергә ашыҡтым. Әлегеләй иҫтә: иң беренсе осраған кешеләрем Ғәйникамал һәм Ҡәмәр еңгәләр булды. Ғәйникамал еңгә шатлығынан һөйөнсөгә күлдәк вәғәҙә итте; аҙаҡ, вәғәҙәһен үтәп, мине шатландырҙы...

Тормош бер аҙ йүнәлгәс, 1946 йылдың 1 октябрендә атайым Ябалаҡлы ете йыллыҡ мәктәбендә янынан уҡый башлай. 1949 йылда ете класты тамамлап, Дәүләкән педучилищеһына уҡырға инә. Училищенан һуң йәш белгес Маҡар районының (хәҙерге Ишембай районы) Маҡар мәктәбендә физкультура уҡытыусыһы булып эш башлай. Шунда эшләгән ваҡыттарҙы, Маҡар ауылы кешеләрен, коллегаларын бик яратып, һағынып иҫкә ала торғайны. Тик тыуған яҡ, ауылыбыҙ тәйәкләгән йәмле Дим буйҙары, яҡындары барыбер уны үҙенә тарта: 1955 йылда үҙебеҙҙең Шишмә районы мәктәптәрендә эшләй башлай. Ошо ауылдан буласаҡ әсәйебеҙ Ләлә Ғүмәр ҡыҙына өйләнеп, ғаилә ҡора.

Ваҡыт үткән һайын атайымдың күңеле кендек ҡаны тамған Яңы Ябалаҡлыға тартыла. Беҙҙең, дүрт балаларының да изге йәнтөйәгенә әйләнгән был ауыл бик тә аянысл хәлдәрҙе кисергәнс билдәле. Тамыры әллә нисә йөҙ йыллыҡ төпкөл тәрәнлегенән һут алған Яңы Ябалаҡлы бер мәл башҡорт халҡына ҡарата батша золомдары дәүерендә яндырылған булған. Тура һәм күсмә мәғәнәлә ата-бабалар ҡаны һеңгән көлдән күтәрелә ул. 1959 йылда атайым тыуған ауылы Яңы Ябалаҡлыла ике генә бүлмәнән торған башланғыс мәктәп һалдырыуға ирешә. Инәйебеҙ хәтерләүенсә, атайыбыҙ төп яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алған, күп нәмәне үҙе атҡарған: төҙөлөш ағасы артынан барған, бүтән кәрәк-ярағын тапҡан, эште ойоштторған. Беҙҙең дә, шағир әйтмешләй, тәү башлап үрелеп асҡан мәктәп ишегебеҙ атайым һалған ыҡсым, нурлы бинала булды. Ауылда балалар апаруҡ ине. Дүрт синыфлы башланғыс мәктәптә атайыбыҙ китапхана ла булдырҙы, гәзит-журналдар яҙҙырҙы, башҡорт китаптарын тупланы. Беҙгә диафильмдар күрһәткәне бала саҡтың сағыу күре-

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

# ҠОЛАҒЫҢ МЕНӘН ТЫҢЛА ЛА...

## көй менән дауалан



**Борон-борондан медиктар, иң беренсе осраҡта мосолмандар, көйҙө дауалау сифатында ҡулланған. Ислам донъяһында ла махсус дауалау үҙәктәре асылған: VIII быуаттың башында уҡ Фес (Марокко) ҡалаһында; IX быуатта Бағдадта һәм Дамаскта; 1279 йылда Алеппола был үҙәктәр үҙ көсөнә ингән. Бында ауырыуҙарҙы үҙенә тура килгән көй менән дауалағандар.**

1284 йылда Ҡаһирәлә Әл Мансур Сәйфетдин Калавун Мансурийа исемле кеше шифахана төҙөтә. Был шифаханаларҙа көй менән дауалағандар, ул ысынлап та ауырыуҙың хәлен яҡшыртҡан. Бынан тыш, махсус эшкә ялланыусылар ауырыуҙарға көлкөлө хикәйәләр һөйләй торған булған. Ошо уҡ шифаханаға матур тауышлы мөәзиндар дини йырҙар йырларға саҡыртылған. Шул рәүешле ауырыуҙарҙың һыҙланыуҙары бөтөп ҡалған. Был шифаханала әлеге көндәрҙә лә дауалауҙың ошо ысулдары киң ҡулланыла. Бөгөн ҡайһы бер шифаханаларҙа был ысул телевизор, радио һәм компьютер ярҙамында алып барыла.

Кеше организмының 60-70 проценты һыуҙан тора. Шул сәбәпле, һыу беҙҙең организмда тауыш тирбәлеүҙәре өсөн бик яҡшы үткәргес булып тора. Беҙ ҡолаҡтарыбыҙ менән генә түгел, ә бөтә күҙәнәктәребеҙ менән был тирбәлеүҙәрҙе тоябыҙ. Ығы-зығы йәки көслө тауыш беҙҙә стресҡа килтерә, кәйефебеҙҙе боҙа һәм төшөкөлөккә бирелдерә. Һөҙөмтәлә беҙҙең иммун системаһын көсһеҙләндерә. 90 децибелдан юғары тауыштар стресс барлыҡҡа килтерә һәм ҡолаҡты һаңғыраулата. Др.Пиерс Дж.Ховард нығ юғары сифатлы тирбәлеүҙәр беҙҙең аңыбыҙға алкоголь һәм наркотик кеүек уҡ тәьҫир итә һәм һүлпәнлеккә килтерә, һуңынан буйһоноусанлыҡҡа алып бара, тип билдәләй. Тауыштар шулай уҡ эсә ҡарыныңдағы яралғыға ла тәьҫир итә. Яралғы бит 16-сы аҙнаһында уҡ ишетә, тоя башлай.

"Нью-Йорк Стрэнг" яман шеш ауырыуҙарын иҫкәртеү үҙәгенән Митчел Гейнор музыканың һауыҡтырыу үҙенсәлеге тураһында былай тип әйтә: "Хәҙер врачтар гармониялы музыка менән һаулыҡ араһында бәйләнеш барлығына нығыраҡ инана бара. Әгәр ҙә беҙ яҡшы кешеләр һәм аһәңле көй мөхитендә булһаҡ, үҙебеҙҙе яҡшы тояясаҡбыҙ. Мин яғымлы тауыш һәм аһәңле көйҙән башҡа кешегә һәр яҡтан яҡшы тәьҫир иткән һәм тормошон яҡшыға үҙгәрткән бер нәмәне лә тапманым.

✓ *Ошо йәшемә етеп, төрлө яҡтарҙа йөрөп, күптәр менән аралашһам да, атайымдай кешене осратманым... Уның кеүек һәр ваҡыт тыныс, сабыр, тоғролоҡло, намыҫлы, ябай һәм шул уҡ ваҡытта көслө рухлы зат юҡтыр*



неше, мөғжизәһе һымаҡ хәтергә уйылған. Мәктәбебеҙ халыҡты берләштергән, тартып торған белем, мәҙәниәт усағына әйләнгәйне, ә атайыбыҙ - уны дөрләткән сығанаҡ, ауылыбыҙҙың алтын бағанаһы. Шуныһы үкенесле: атайыбыҙ һалған мәктәп ун бер генә йыл эшләп өлгөрҙө, сөнки ауыл халҡы ул һәм ҡыҙҙарын күрше Дурас ауылында уҡытыуҙы хуп күрә башланы: йәнәһе, балалары урыҫса яҡшы беләсәк... Мәктәбебеҙҙе һүтеп алып китеүҙәрен атайым ныҡ ауыр кисерҙе; йөрәге нисек һыҙлағанын уйлаһаң, әле лә үҙ йөрәгебеҙ теленгәндәй...

Атайыбыҙ ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыны. 1973 йылда университетты тамамланы, артабанғы уҡытыусылыҡ эше Дурас урта мәктәбе менән бәйле - хаҡлы ялға сыҡҡансы шунда уҡытты: йәш быуынға башҡорт теленән белем бирҙе, туған телебеҙгә һөйөү тәрбиәләне. Әсе нужа һурпаларын татыған һуғыш осоро балаһы, совет ваҡытында белем, хеҙмәт тәрбиәһе алған шул заман педагогтары, уҡытыусыларының сағыу өлгөһө ине ул. Үҙен үҙе тәрбиәләгән, аң-белемен арттырған, мәҙәни, рухи кимәлен байытыуға күп тырышлыҡ һалған һоҡланғыс кеше булды атайыбыҙ. Эске донъяһының матурлығы йөҙөндә лә сағылып, кешеләрҙе тартып торҙо. Һомғол, ҡарағайҙай таҙа кәүҙәле, оҙон буйлы ине, спортты яратты. Пенсия йәшендә лә район, ауыл Советы өсөн саңғы ярыштары унһыҙ үтмәй торғайны. "Иң оло ярышсы" тигән исем үҙенән айырылманы. Был хаҡта һөйләгән гәзит биттәре әле лә ғаиләбеҙҙә ҡәҙерләп һаҡлана. Атайыбыҙҙың саңғыға баҫып, йылмайып торған һын-ҡиәфәте алыҫ йылдар аша һаман йылы бөркә кеүек...

Атайым менән инәйем бик эшсән кешеләр ине: дүрт бала үҫтереп, белем биреп, тормош юлына баҫтырҙылар. Мин, тәүге балалары Мөнирә, нефть техникумын тамамланым, үҙем өс бала әсәһемен. Һеңлем Әлфирә атайыбыҙ юлын һайлап, ғүмерен йәш быуынға белем, тәрбиә биреүгә арнаны, филолог та, төрлө гранттар яулаған тәжрибәле психолог та. Дамир ҡустым, медицина институтында уҡып, хәрби табип булып китте, хеҙмәтендә полковник дәрәжәһенә күтәрелде. Бик тәжрибәле, танылған белгес. Кинйәбеҙ - Гөлфиә һеңлебеҙ - Өфө сәнғәт институтын тамамланы. Атай-инәйебеҙ ул-ҡыҙҙары, ейәндәре тормошонан, уңыш-ҡыуаныстарынан йәм табып, рухланып, кинәнеп ултырҙы. Ғорурлыҡтарын ҡупайтмаһалар ҙа, шатлыҡтарын да йәшермәнеләр.

Беҙ, балалары өсөн генә түгел, бар ауылға үрнәк ине атайыбыҙ. Инәйебеҙ донъяла иң бәхетле ҡатын булғандыр. Хәҙер үҙебеҙ олоғайғас, ир ҡатыны, әсәй, хатта өләсәй булғас, йәшәлгән ғүмер, ғаилә тәжрибәһе шул фекерҙе нығыта ғына. Инәйебеҙгә шул саҡлы ихтирамлы, итәғәтле, әҙәпле мөнәсәбәте үҙе үк оло һөйөүенең сағылышы булған икән. Һәнәк-көрәк, балта-салғы ҡулында уйнап тороуҙан тыш, "был ҡатындар эше" тип, эш тә айырып торманы: ашарға ла бешерер, кейемебеҙҙе лә рәтләштерер, хатта, балалары таралышып бөткәс, ең һыҙғанып аласығыбыҙҙы ла һылар ине. Инәйебеҙҙе шулай һаҡланы, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ мәшәҡәттәрен еңеләйтте. Атайыбыҙ өлгөһө үҙе үк беҙгә, балаларына, иң яҡшы тәрбиә, ғүмерлек һабаҡ!

Ошо йәшемә етеп, төрлө яҡтарҙа йөрөп, күптәр менән аралашһам да, атайымдай кешене осратманым... Уның кеүек һәр ваҡыт тыныс, сабыр, тоғролоҡло, намыҫлы, ябай һәм шул уҡ ваҡытта көслө рухлы зат юҡтыр тип уйлайым. Бала саҡта ла, олоғайғас та бер ваҡытта ла уның тормошҡа, донъяға зарланғанын, әрләшкәнен, тауыш күтәргәнен ишетмәнек. Һүҙе үтемле, үҙе ихтирамлы ине.

...Атайыбыҙҙың яҡты донъяны ҡалдырып китеүенә лә байтаҡ ғүмер уҙған. Ләкин хәтеребеҙ ғүмер ағышында юғалмай: ауыл зыялыһы, арҙаҡлы уҡытыусы, өлгөлө ғаилә башлығы булған атайыбыҙ хәтеребеҙҙә әллә ниндәй хакимдарҙың да тәхетенән бейегерәк урын биләй. Аталы бала - арҡалы, тиҙәр. Көслө таяныс-терәк булды шул атайыбыҙ барыбыҙға ла. Ҙур, ныҡлы усының, йомшаҡ күңеленең, иркә ҡарашының йылыһы хәтеребеҙҙән һис бер ваҡыт һүрелмәҫ. Тормошсан кәңәштәре һәр саҡ иҫкә төшөп кенә тора, нурлы йөҙө күңелгә тыныслыҡ, ышаныс бөркә.



**Мөнирә МЫРҘАҒӘРЕВА.**
**Томск ҡалаһы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Дүртенсе хат: "Иң ҙур байлыҡ - йәшәү"

"Тын алабыҙ - тынды сығарабыҙ, тынды сығарабыҙ!" Гимнастика буйынса инструкторҙың тауышын ишетәм: "Күкрәк тултырып һулау өсөн тынды яҡшылап сығарып бөтөргә кәрәк. Тәү сиратта тынды сығарырға, "файҙаланылған һауа"нан арынырға өйрәнегеҙ".

Йәшәү - ул тәү нәүбәттә һулыш алыу. "Йән", "рух"! Ә үлдең икән - тәү сиратта - "тын алыуҙан туҡтау". Борондан шулай килә. "Йәне сыҡты!" - тимәк, үлде. (Тәрж. иҫк.: Бында һәм артабан автор рус телендәге душа, дух, дышать, дыхание, душно һүҙҙәрен ҡуллана).

Өйҙә "тынсыу" була, рухи тормошта ла "тынсыу" була. Бөтә ваҡ мәшәҡәттәрҙе, көндәлек тормоштоң барлыҡ ығы-зығыһын тулыһынса сығарырға, ҡотолорға, фекер йөрөтөргә ҡамасаулаған, күңелде төшөргән, кешегә тормошто, уның байлығын, матурлығын ҡабул итергә ҡамасаулаған барыһын да һелкеп ташларға.

Кеше барлыҡ буш мәшәҡәттәрҙе ситкә ташлап, һәр ваҡыт үҙенә һәм башҡаларға иң мөһиме булған нәмә тураһында уйларға тейеш.

Башҡаларға ҡарата ихлас, түҙемле булырға, тәү сиратта тик яҡшы яҡтарын ғына күрергә кәрәк. Иң яҡшыны, һәйбәтте, "ҡапланған матурлыҡты" эҙләй һәм таба белеү кешене рухи яҡтан байыта.

Әһәмиәтһеҙ ваҡ-төйәк ҡатламы араһында тәбиғәттә, ауылда, ҡалала, урамда матурлыҡты күрә белеү, кешеләргеһе тураһында әйтеп тораһы ла түгел, ул - йәшәү даирәһен, кеше йәшәгән тормош иркенлегенең даирәһен киңәйтеүҙе аңлата.

Даирә һүҙен оҙаҡ ҡына эҙләнем. Тәүҙә үҙемә: "Тормош сиктәрен киңәйтергә кәрәк", - тинем, әммә тормоштоң сиге юҡ! Ул кәртәләнеп алынған ер түгел. Шуға тормош сиктәрен киңәйтеү - әйтергә телләгән фекеремде сағылдырмай. Тормош офоҡтарын киңәйтеү - яҡшыраҡ яңғырай, шулай ҙа тап киләкермәй. Максимилиан Волошиндың уйлап тапҡан "окоем" һүҙе бар. Был күҙ күреме ер, тигәнде аңлата. Әммә бында ла көнкүреш белемебеҙҙең сикле булыуы ҡамасаулай. Тормош көнкүреш тәьҫораттарына ғына ҡайтып ҡалырға тейеш түгел. Беҙ аңлай алғандан юғарыраҡты тоя һәм хатта күрә белергә кәрәк. асылып барған йәки асылырға мөмкин яңылыҡты һиҙемләү булырға тейеш.

Донъяла иң ҙур байлыҡ - ғүмер: башҡаларҙыҡы, үҙендеке, хайуандар һәм үҫемлектәр донъяһының тормошо, мәҙәниәттең йәшәүе, ғүмер буйы - үткәндә, бөгөнгөлә, киләсәктә... Ә йәшәү икһеҙ-сикһеҙ тәрән. Быға тиклем осратмаған һәм үҙенең гүзәллеге, көтөлмәгән аҡылы, ҡабатланмаҫлығы менән һушты алыр нимәләрҙер юлыбыҙға һәр ваҡыт сығып тора.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Моцарт һәм Вивальдиның музыкалары яралғының йөрәк тибешен әкренәйтә, шулай уҡ ҡапыл эшләгән хәрәкәттәрен кәметә. Шул уҡ ваҡытта рок һәм поп-музыка балаға тынысһыҙлыҡ килтерә".

Әле ҡиммәтен тулыһынса аңлап бөтөрмәһәк тә, кеше тауышы үҙе лә дауалау көсөнә эйә. Тауышҡа һәр күҙәнәккә, кеше тәненең һәр ағзаһына тәьҫир итеү көсө бирелгән. Көйҙөң дауалау үҙенсәлеген ҡулланыр өсөн яғымлы көй тыңларға һәм Ҡөрьән уҡырға кәрәк. Түбәндә килтерелгән Ҡөрьән аяттары ошоно күрһәтә лә инде: "Һуңынан уны (Әҙәмде) камиллаштырып, кеше рәүешенә килтерҙе, уға үҙ рухынан йән өрҙө. Һәм һеҙҙең өсөн ҡолаҡтар, күҙҙәр, йөрәк яралтты. Ни сәбәпле һеҙ шул ҡәҙәре әҙ шөкөр итәһегеҙ?" (Сәжҙә, 9). "Бер нәмә лә белмәгән, аңламаған хәлдә һеҙҙе әсәйегеҙ ҡарынынан сығарҙы; бәлки, шөкөр итерһегеҙ тип, һеҙгә ҡолаҡтар, күҙҙәр һәм күңел һиҙеме бирҙе" (Нәхл, 16:78).

Торонто университеты медицина факультеты профессоры доктор Кейт Мур үҙенең "Кеше эмбриологияһы" исемле китабында, кеше эмбрионы иң беренсе ишетеү һәләтен, һуңынан күреү һәләтен үҙләштерә, ә һуңынан уның тойоу, аңлау һәм интеллекты үҫешә, тип яҙа. Яралғының был эҙмә-эҙлелеге үрҙә килтерелгән Ҡөрьән аяттары менән тура килә. Ҡөрьәндең дауалау үҙенсәлегенә эйә икәнлеген Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә иҫбат иткән.

Аллаһ кешегә ҡолаҡтар һәм ишетеү һәләте биргән. Был, кеше матур, тыныс, яғымлы көй тыңлап, рухын һәм әхлағын нығытһын, йөрәген тынысландырып, аңын үҫтерһен өсөн бирелгән ниғмәттәр.

*ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН*

### Балыҡ һәм бәшмәкле запеканка

Майланған табаға 500-700 гр сей балыҡ филеһы, уның өҫтөнә майҙа еңелсә ҡыҙҙырылған һәм онда әүәләнгән 300 гр бәшмәк (тоҙло ла ярай), 1-1,5 стакан ҡаймаҡ йәки һөт өҫтөн һалырға, 2 ҡалаҡ ҡырылған сыр, тәменсә төйөлгән борос, тоҙ һибергә. Балыҡ һарғылт төҫкә ингәнсе духовкала бешерергә.

### Туңдырмалы салат

2 банан, әфлисун, алма, 2 пломбир туңдырма, шәкәр ҡомо, ҡыҙҙырылған арахис сәтләүеге кәрәк.

Еләк-емеште турарға, шәкәр ҡомо, йомшарған туңдырма менән ҡушып болғарға, өҫтөнә сәтләүек һибергә.

### Кесерткәнле салат

Йомшарған майҙы ит турағыстан үткәрелгән кесерткән һәм керән менән бутарға. Был ҡатнашма файҙалы - икмәккә һылап та, ярманан бешерелгән ризыҡтарға тәмләткес итеп ҡушып ашарға ла була.

### Ҡара емешле сәй

2 балғалаҡ ҡара сәй, 500 мл һыу, 2 ҡара емеш алырға. Емештәрҙе йыуып, ҙур булмаған һауытҡа һалырға, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға. 10 минуттан алырға һәм ваҡ ҡына итеп турарға. Сәйнүккә сәй менән бергә ҡара емеште лә һалырға һәм ҡайнар һыу ҡойоп, томалап, 2 минут самаһы тоторға.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# М. КӘРИМ ИСЕМЕНДӘГЕ МИЛЛИ ЙӘШТӘР ТЕАТРЫНА - 35 ЙЫЛ

**Башҡортостан Республикаһының Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры 1989 йылда Йәш тамашасы театры булараҡ асыла, 1995 йылда Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарарына ярашлы Милли йәштәр театры тип исемләнә.**




1999 йылда камера сәхнәһе барлыҡҡа килә - был режиссерҙарға тәжрибә үткәрергә, яңы алымдар ҮҘләштерергә мөмкинлек бирә. Йәш коллектив "Камера сәхнәһендә классика" проектын тормошҡа ашыра башлай.

2002 йылда театр үҙенең XIII миҙгелен яңы бинала башлай.

2006 йылдың ғинуарында Йәштәр театрына Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим исеме бирелә. Әҙиптең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы театр уның әҫәрҙәре буйынса аудиокитаптар әҙерләне. Проект 2017 йылда БР Башлығы грантына башҡарылды.

Театр асылғандан алып бында күренекле сәхнә оҫталары эшләй: Олег Ханов, Роза Кәримова, Әхтәм Абушахманов, Сәүиә Сираева һәм башҡалар.

Тәүге көндәренән үк театр ике телле булараҡ эш алып бара: ике (башҡорт һәм рус) труппаның да үҙ репертуары бар, ике телле тамашалар ҙа ҡуйыла. Театр артистары телевидение һәм кино сәнғәте менән дә тығыҙ бәйләнештә. Театр ижади багажын сит ил, урыҫ, башҡорт классик әҫәрҙәре менән туплай.

Бөгөнгө көндә театрҙың директоры БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәфис Мөхәмәтйәнов, художество етәксеһе - Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Мөсәлим Ҡулбаев, ә башҡорт труппаһының баш режиссеры - Ш. Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы лауреаты Рөстәм Хәкимов.





Шоколад ағасы

Емеш ағасы

Ҡаҙылма яғыулыҡ

"Ерҙән айырылған елгә (...)"

Башҡорт мәғрифәтсеһе тураһында спектакль

М. Кәримдең поэмаһы буйынса спектакль

Һарыҡ көтөүсе

Һүҙ төркөмө

"(...)тың аяғы ҡыҫҡа"

Спектаклдә уға - дүрт кейәү

Спектаклдәге һуғанбаш малай

Ағас

"(...) һүҙе - диңгеҙ тулҡыны"

"(...) ҡарға алдан ҡысҡырыр"

Ҡылыс һауыты

Урта Азиялағы тауҙар теҙмәһе

Элементтың ваҡ өлөшө

Ҡиммәтле металл

Спектаклдә "Р"-һыҙ ҡалған

"(...) аҙаштыра, тәрән батыра"

Япон йәнһүрәте

Борондан килгән тәртип

Туғандаш халыҡ

Дөйә затынан

Ҡыш тора торған урын

Саҡырылған кешеләр

⌘

Индонезиялағы утрау

"(...)һы болан атмағандың балаһы ҡолан атмаҫ"

Аяҡ аҫтындағы йәшеллек

Кәләш/кейәүҙең атаһы

Ҡон

Һыу төбөндәге тупраҡ

Ҡыяр, кишер

Ҙур балыҡ

Йылға һәм машина маркаһы



Беренсе китап

Баҡа бото ашаусы

Ҙур карап

⌘

Тамъяндарҙың тамғаһы



Театрҙағы тәнәфес

Нәҫелдәш туған

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**29-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Остаз. Игебаев. Катод. Ҡаҙна. Тарих. Баҫма. Бураҙна. Нәнәй. Ғәйеп. Лена. Ата. Нәжми. Тана. Әхәт. Рәсем. Әлшәй. Раса. Әй. Уран. Төйәк. Балапан. Күгиҙел.

**Вертикаль буйынса:** Бөрлөгән. Ҡырсынташ. Ҙур. Йәйә. Иген. Йәнбәк. Абаға. Очерк. Аҡтау. Робаги. Температура. Анапа. Завод. Нил. Төн. Нарат. Әллә. Әләм. Хәй. Икмәк.

ЙӘШЕЛ ДАУА



# ҠАРБУЗ

**Ҡарбуздың дауалау сифаттары ифрат күп. Был татлы емеш бөйөр, йөрәк-ҡан тамыр ауырыуҙарынан, диатездан һәм диабеттан ярҙам итә. Ҡарбуз бөйөрҙәрҙең антитоксик функцияһын тиҙ яҡшырта, шуға күрә ул һары ауырыуы менән ауырыусыларға бик файҙалы. Склероз, подагра, артрит, ревматизм, һимереү менән яфаланғанда ҡарбузды мөмкин тиклем йышыраҡ ҡулланырға кәңәш ителә. Ҡарбуз ҡабығы йыуан эсәк эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, балаларҙа һәм өлкәндәрҙә дисбактериозды дауалай.**

**Йыуан эсәк шешеүе.** Киптерелгән ҡарбуз ҡабыҡтарын иҙергә, 2 стакан ҡайнар һыуға 5 ҡалаҡ иҙмә һалырға, ҡапҡас менән ябып, һыуынғансы төнәтергә. Һарҡытырға. Көнөнә 4 тапҡыр 0,5 стакан ҡабул итергә.

**Гельминтоз.** Духовкала ҡарбуз емештәрен киптерергә, ит турағыстан үткәрергә, һөт менән бутарға. Көн дауамында ҡабул итергә.

**Мигрень, баш ауырыуы.** Әҙ-әҙ йотомлап, ҡабаланмай, 2 стакан ҡарбуз һутын эсергә. Әмаңлайға ҡалын ҡарбуз ҡабығын бәйләргә. Ауыртыу тиҙ үтә.

**Диатез.** 0,5 литр һыуға 2 ҡалаҡ иҙелгән ҡарбуз ҡабығын алырға, талғын утта 5 минут ҡайнатырға, 2-3 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 0,5 стакан эсергә.

**Йөрәктең ишемия ауырыуы.** Ҡарбуз һутына 2 алма һуты өҫтәргә. Ошо ҡатышманы көҙ миҙгелендә көн һайын ҡабул итергә.

**Күп ауырыуҙарҙан дауа булып торһа ла ҡарбуздың кире яҡтары тураһында ла оноторға ярамай. Ҡарбуз менән ағыуланыу осраҡтары күп. Әгәр ҡарбуз йомшағында бер нисә һарғайған урын булһа, уны һис кенә лә ҡулланырға ярамай. Был емеште эс ауырыуҙары булғанда ҡулланыу тыйыла. Тағы ла атеросклероз сирлеләргә ҡарбуз ҡайнатмаһын ҡулланырға ярамай.**

**Рим ӘХМӘДОВ.**

ҺАЙЛАУҘАР-2024

**График распределения между зарегистрированными кандидатами на должность Главы Республики Башкортостан бесплатной печатной площади для публикации предвыборных агитационных материалов в газете "Киске Өфө"**

Хабиров Радий Фаритович - **30.08.24, №34,**

Сухарев Иван Константинович - **23.08.24, №33,**

Нагорный Владимир Александрович - **30.08.24, №34,**

Шайнуров Артур Альбертович - **23.08.24, №33,**

Тимерьянов Ильшат Маратович - **16.08.24, №32.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

## "БӨЙӨК ДАЛА" САҠЫРА

**2-3 августа Хәйбулла районында VI "Бөйөк дала" асыҡ республика башҡорт рок фестивале ойошторола. Проект милли рок мәҙәниәтенең иң яҡшы традицияларын популярлаштырыуға һәм үҫтереүгә, ҡатнашыусыларҙың һөнәри оҫталығын күтәреүгә, туған телде һаҡлауға һәм үҫтереүгә, рок музыкаһын һөйөүселәрҙе һәм башҡарыусыларҙы берләштереүгә йүнәлтелгән.**

Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, фестиваль ваҡытһыҙ донъя ҡуйған легендар башҡарыусылар: "Дәрүишхан" төркөмө солисы Дим Мәннән, "Рух" төркөмө солисы Гәзинур Биктимеров, "Рух" төркөмө гитарасыһы Ирек Атанов һәм аранжировкалаусы, барабансы Айтуған Акилов иҫтәлегенә арнала. Фестиваль барышында "Башҡортостан Республикаһында этно-рокты үҫтереү мөмкинлектәре" темаһына түңәрәк ҡор ойоштороласаҡ, унда рок төркөмдәре етәкселәренең ҡатнашыуы көтөлә. Лазер һәм ут шоуы, шулай уҡ лотерея уйнатыу ойоштороласаҡ. Ҡатнашыусылар өсөн мотлаҡ шарт - тере тауыш менән сығыш яһау һәм туған телдә йырлау. Фестивалде Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Хәйбулла районы хакимиәте ойоштора.

## "ӘЛИФБА" ЙӘНҺҮРӘТЕ




**Башҡортостан Башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә балаларға башҡорт телен өйрәнеү еңел һәм мауыҡтырғыс булһын өсөн төшөрөлгән "Әлифба" йәнһүрәт сериалы тураһында хәбәр итә.**

"Кескәйҙәр башҡорт телен бына шулай ҡыҙыҡлы һәм күңелле итеп өйрәнергә тейеш. Таныш булығыҙ, Айгөл һәм Айтуған, улар балаларыбыҙға башҡорт алфавиты хәрефтәрен өйрәтер. "Әлифба" - 3-5 йәшлек балалар өсөн ҡыҫҡа ғына йәнһүрәт сериалы. Был йәнһүрәт Фондтан бүленгән грантҡа төшөрөлдө. Проектты "Башҡортостан" киностудияһы булышлығында карикатура оҫтаһы Камил Буҙыҡаев һәм "Муха" студияһы әҙерләне. Һәр серия өҫтөндә, сценарий авторҙары һәм рәссамдарҙан тыш, балалар психологтары, музыканттар, уҡытыусылар эшләй. Әлек был йәнһүрәтте телевидениела ғына күрһәтһәләр, хәҙер социаль селтәрҙәрҙә, проекттың рәсми төркөмөндә ҡарарға мөмкин. Яҙылығыҙ һәм балаларға күрһәтегеҙ", - тип тәҡдим итә Радий Хәбиров.

## БАЛАЛАР КИНОФЕСТИВАЛЕ

**"Өс таған" балалар һәм үҫмерҙәр республика кинофестиваленә ғаризалар ҡабул ителә. Быйыл фестиваль Ғаилә йылына бағышлана һәм социаль йүнәлешле.**

Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, унда 18 йәшкә тиклемге балалар, шул иҫәптән өлкәндәр - уҡытыусылар, ата-әсәләр менән эшләгән үҫмерҙәр саҡырыла. Командала ике өлкән кеше генә булырға тейеш. Конкурсҡа түбәндәге номинацияларҙа эштәр ҡабул ителә: уйын ҡыҫҡа метражлы фильмы, документаль фильм, йәнһүрәт, музыкаль клип, социаль ролик. Фестиваль ике этапта үткәрелә, ғаризалар һәм эштәр 7 сентябргә тиклем ҡабул ителә. Финалды уҙғарыу урыны һәм көнө, шулай уҡ бүләкләү тантанаһы рәсми сайтта һәм ойоштороусыларҙың социаль селтәрҙәге төркөмдәрендә баҫыла. Фестивалде Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Ә. Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы, Башҡортостандың Кинематографистар союзы ойоштора.

## ШӘП БАЙРАМ БУЛА

**Өфө мэрияһы баш ҡаланың юбилейы билдәләнгән көндәргә концерт программаһын тәҡдим итте. Афишанан күренеүенсә, саралар барлыҡ майҙансыҡтарҙа, шул иҫәптән район парктарында ойоштороласаҡ.**

31 августа кис көнө Ленин исемендәге майҙанда ( "Кала советы" туҡталышы) Дмитрий Харатьян, Екатерина Гусева һәм Милли гвардияның өлгөлө оркестры, ә һуңыраҡ - Полина Гагарина һәм башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары Айҙар Ғәлимов, Гүзәл Уразова, Рөстәм Ғиззәтуллин һәм башҡалар сығыш яһай. "Торатау" конгресс-холы янындағы амфитеатрҙа "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә концерт буласаҡ."Моторҙар эшләүселәр" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда Гарик Сукачев һәм Юрий Антонов йырлай.

## ЙЫРҘЫҢ ТАРИХЫ ШУЛАЙ

**"Ел, ерәнем" йырының ижад ителеүенә иҫтәлекле ваҡиға - Керчь (Ҡорос) ҡушаматлы яу атының үҙ яғына әйләнеп ҡайтыуы сәбәпсе була. Ул Бөйөк Ватан һуғышынан Башҡортостанға ҡайтҡан берҙән-бер ат булараҡ тарихҡа инеп ҡала.**

"Был хәлде ишеткәндән һуң композитор Заһир Исмәғилев менән шағир Нәжиб Иҙелбай илһамланып китеп "Ел, ерәнем" йырын ижад итә. Ул совет кавалерия йырҙары традицияларында яҙылған һәм башҡорт милли ерлегендә үҫтерелгән. Йырсы Сәлих Хөснийәров уны тәү башлап 1946 йылда СССР Композиторҙар союзы пленумында башҡара, ә 1949 йылда был йыр Бөтә Союз совет йыры радиоконкурсында 1-се урын яулай. Был йыр - атҡа ла, яугирға ла үҙенсәлекле музыкаль һәйкәл ул", - тип яҙа сәнғәт фәндәре докторы Гөлназ Ғәлина. Һуғышҡа ебәрелгән сағында Керчь биш йәшлек була, уны данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына алалар. Алғы һыҙыҡҡа ул 1942 йылдың июнендә эләгә. Брянск өлкәһенән Берлин ҡалаһына тиклем барып етә, ике тапҡыр ҡаты яралана. Керчь әйләнеп ҡайтҡас, ауыл халҡы Енеү көнөндәге кеүек ҡыуанған, хатта шатлыҡтан илаған, тиҙәр. Тыныс тормошта ат колхозға хеҙмәт иткән, 23 йәшкәсә йәшәгән.

ТЕЛҺӨЙӘР

## САҒАУЫНДАЙ БУЛАЙЫҠ!

**Алоэ үҫемлеге телебеҙҙә сабур тип тә аталып йөрөтөлә. Сабур халыҡ медицинаһында күп сырхауға ҡаршы ҡулланылған. Өйҙәрендә сабур үҫтереүсе һәр кешегә уның төрлө файҙаһы ысынлап та яҡшы билдәле. Сабур төнәтмәһе. Ер йөҙөндә сабурҙың биш йөҙләп төрө бар.**

**Сағауын.** 1. Диалект телендә - бал ҡорто. *Сәскәләренән бал яуған йүкәлектә сағауындар гөжләй. Сағауын күс айыра.* 2. "Сағауындың" тағы бер мәғәнәһе - иңкеш. *Ҡыйыҡ аҫтында сағауын ояһы бар.*

**Сағра** тигәндә, тау-урманлы, үткеһеҙ урындар күҙҙә тотола. *Сағраларҙа һирәк үҫемлектәр юғалыуҙан һаҡланып ҡалыусан.*

**Сабыуыл.** Атлылар һөжүмен һәрбиҙәр тап шулай, "сабыуыл" тип атай. *Сабыуыл алдынан аттарҙы ял иттереү. Башҡорт дивизияһы яугирҙары дошманға көслө сабыуыл яһаған.*

**Сағым.** "Монар" тигән һүҙҙең синонимы. *Баҫыуҙар сағымдан зыян күрмәһен ине.* Ә инде "сағым"дың тағы ла бер мәғәнәһе "мираж" һүҙе менән белдерелә. Миҫал: *Сүллектә сәйәхәтселәр алдында сағым хасил булған. Сағымда - мул һыулы күл күренеше.*

**Шулай итеп... Телебеҙҙе байытыуҙа сағауындай тырыш һәм ныҡыш булайыҡ.**

**НУРБИКӘ** әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕЛЕМЛЕ КЕШЕ... күккә ашыр

Һары мәтрүшкә - алтмыш төрлө ауырыуға, күрән мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуға дауа.

**(Башҡорт халыҡ әйтеме).**

Бәхәстәрһеҙ донъя бик күңелһеҙ булыр ине. Бар тере йән тураһында фекер алышыу, бәхәсләшеү кәрәк.

**(Чарли Чаплин).**

Ҡыҙ-ҡатындар матур итеп кейенергә, шул кейем аҫтындағы тәненең бер өлөшөн күрһәтеп-күрһәтеп алырға һәм шуның менән үҙенең табыныусыларына уны ҡасан да булһа бер тулыһынса күреү өмөтө бирергә ярата. Тәбиғәт тә ҡатын-ҡыҙ һымаҡ...

**(Дени Дидро).**

Һәләтлелек мөмкинлектәрҙән тыш бер нәмә лә түгел.

**(Наполеон Бонапарт).**

Бары тик йөрәк кенә барыһын да күрергә һәләтле. Иң мөһимен күҙҙәр менән күреп булмай.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Яҙмыш беҙҙең ҡылыҡтарҙың ҡап яртыһы менән идара итә, ҡалған яртыһы менән идара итеүҙе беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡалдыра.

**(Николло Макиавелли).**

Ҡағыҙәләрҙе күҙәтеүҙән туҡтаһаҡ, беҙ юғалып ҡалабыҙ һәм нимә эшләргә лә белмәйбеҙ. Ҡағиҙәләргә буйһоноп йәшәйек.

**(Людовик Бурбон).**

Беҙҙең тормошобоҙҙағы күңелһеҙлектәрҙең яртыһы "Юҡ" тигән һүҙҙе тиҙ генә әйтмәй, "Эйе" тигәнен тиҙ генә әйтеү менән бәйле.

**(Бернард Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер изге әүлиә океан яры буйында йөрөп йәшәп ятҡанда уның эргәһенә йәш кеше килә һәм шулай тип ҡысҡыра:**

**- Мин көн дә һинең ошонда бер хәсрәтһеҙ һәм хәстәрһеҙ йөрөп ятҡаныңды күрәм. Шул уҡ ваҡытта тирә-яғыңда күпме ҡайғы-хәсрәт, хәйерселек хөкөм һөрә. Һин бит шул тиклем көҙәтле кешеһең һәм һинә ошо океан һыуын нефткә әүерелдереү бер ни тормай. Шуны эшләһән, беҙҙең ил кешеләре был тиклем фәҡирлектән ыҙа сикмәҫ ине!**

**Йәш кешенең был йән асыуы менән әйтелгән һүҙҙәренә ҡаршы әүлиә шулай тип яуап бирә:**

**- Эйе, мин ысынлап та океандағы һыуҙы нефткә әйләндерә алыр инем. Ләкин ул ваҡытта был океанға шырпы ташлаусы бер аҡылһыҙ әҙәм мотлаҡ табыласаҡ бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1291